ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 февраль (шаҡай) 2021

№7 (945)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*"...Далала батырҙар көрәшә ине, улар ғәжәп көс һәм таҫыллыҡ күрһәтте. Ҡыйыуҙар бейек шыма бағана осондағы бүләкте алырға үрмәләне, үсмер малайҙар сәкән менән шар тәгәрәтә башланы. Тегендә лә, бында ла егеттәр менән ҡыҙҙар үҙҙәре яратҡан "Бүҙәнә"не бейейҙәр, йырлайҙар, күңел асалар. Былай итеп фәҡәт азат рухлы халыҡ - башҡорттарҙың улдары һәм ҡыҙҙары, күңелдәре көр булған йәштәр генә уйнай ала..."*

**Ф.Д. НЕФЕДОВ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Рух байрамы,** йәки Балыҡсыларҙың ырыу гимнын һәм гербын ҡабул иткәне



6

**Башҡорт ғаиләләре...** дәрәжәле бәйге тотто



7

**Бер-беребеҙ өсөн яралғанбыҙ,** Яралғанбыҙ ерҙә һөйөү булып...



8-9

**Мин үҙемде ошо йәшемдә,** ошо төҫөмдә яратам...



11

**ТВ-программа** 14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Ҡараусыһыҙ ҡалған һәм ярҙамға мохтаж ҡарттар яҙмышы өсөн кем яуаплы?

***Вәсилә ӘХМӘҘУЛЛИНА, Бүҙәк районы, йорт хужабикәһе:*** Бик тә таныш хәл был минең өсөн. Бер-ике һүҙ менән генә был һорауға мин, әлбиттә, ҡарттар яҙмышы өсөн балалары, ә инде балалары булмаһа, туғандары яуаплы, тип яуап бирер инем. Ләкин һин әйткәнсә генә булмай шул донъяла. Күпме ҡарттар, балалары була тороп та, яңғыҙлыҡҡа дусар. Үҙ көнөн күрерлек, үҙ аяҡтарында йөрөрлөк булһа, ярай ҙа, өлкән быуын сыныҡҡан, нисек тә йәшәргә тырыша ул. Ә бына кеше көнлө булып, ярҙамға мохтажлығы төшә икән, был бик ауыр хәл.

Үҙемдең атай-әсәйем иртә киттеләр. Йәшәргә лә йәшәргә ине әле ҡәҙерлеләремә, тик яҙмыштары шулай булғандыр. Унын ҡарауы, оҙаҡ йылдар буйына иремдең ата-әсәһен ҡарау бурысы төштө иңемә. Башҡа балалары - ике ҡыҙы, тағы бер улдары булһа ла, ҡайным менән ҡәйнәм ғүмер буйы йәшәгән нигеҙҙе ташлап, улар янына ситкә китергә теләмәне. Өҫтәүенә, ирем кинйә ул буларак, атай нигеҙендә төпләнеүҙе хуп күрҙе. Мин дә үҙемде ни көтәсәген белеп, ҡайны-ҡәйнә менән йәшәргә риза булып килдем. Бер-бер артлы балалар донъяға килә башлағас, өлкән кешеләргә тынығлыҡ кәрәк, тип, ҡайнымдарға күршеләш кенә йорт һалып сыҡтыҡ, тик барыбер бергә инек: ике йортто бүлеп торорлоҡ ҡойма ла, ҡапҡа ла юҡ, хужалыҡ итеү ҙә, ашап-эсеү ҙә, мал-тыуар ҙа уртаҡ булды. Шулай матур ғына йәшәп ятҡанда, мейеһенә ҡан һауыуҙан 79 йәшендә ҡапыл ғына ҡәйнәм беҙҙе ташлап китеп барҙы. Беҙ бесәндә саҡта картуф күмергә сығып, эҫе һуҡҡан. Һәйбәт кеше ине... Донъябыҙҙың ҡояшы һүнгән һымаҡ булды. Тигеҙ ҡартайырға яҙһын, тип юҡҡа әйтмәйҙәр икән шул. Ошо хәлдән һуң ҡайным ныҡ бирешә, тора-бара аяҡтан яҙҙы. Өфөләге ҡыҙы бер-ике рәт дауаханаға ла һалып ҡараны. Ҡултыҡ таяғында ары-бире йөрөштөрөп, бирешергә теләмәһә лә, сир менән ҡартлыҡ үҙенекен итте: аяҡтары тыңламаны. Ана шул хәлендә мин уны ете йыл ҡарап тәрбиәләнем. Әйтеүе генә анһат, һыҙланып ятҡан өлкән кешене ҡарауҙың ни икәнен үҙем генә беләм. Ирем менән үҫеп килгән балаларым ярҙамынан тыш, мин быны булдыра алмаҫ та инем, буғай. Донъяны, мал-тыуарҙы ҡарарға, ғаиләне хәстәрләргә лә кәрәк бит. Күрше-тирәм мине йәлләп, пенсияһын түләп, берәй ҡараусы ялларға ла кәңәш итәләр ине. Быға намыҫым ҡушманы, үҙең һымаҡ ҡарай буламы сит кеше? Ҡайным, бахыр, рәхмәттәрен уҡып ятты. Аҙаҡҡы һулышында ла башымдан һыйпап, фатихаһын биреп китте...

## КЕМ АЛЫҠ?

### МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр. Гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһәгеҙ ҙә, һәр яҙылыу кампанияһы мәлендә һеҙгә даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеүебеҙҙе беләһегеҙ. Шулай итеп, 2021 йылдың беренсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан "Китап отоу бәхете" тейгән уҡыусыларыбыҙҙы атап китәбеҙ.**

**(Дауамы 15-се биттә).**

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙ ГӘЗИТ

**"Киске Өфө" гәзитен алдырып уҡыған йылдар эсендә ул минең иң яратҡан баҫмаларымдың береһенә әүерелде. Былтыр донъя күргән мәҡәләләрҙең береһендә автор редакцияларға шылтыратыусылар булмауы баҫмала ҡыҙыҡлы мәҡәләләр юҡлығы күрһәткесе, тигәйне. Бәлки, шулайҙыр ҙа, әммә шылтыратырға, йә хат яҙырға ла батырсылыҡ итергә кәрәк бит. Бына мин дә, ниһайәт, бар ҡыйыулығымды туплап, гәзит хеҙмәткәрҙәренә беҙгә бик кәрәкле, йөкмәткеле баҫма сығарыуҙары өсөн рәхмәтемде белдерәм.**

"Киске Өфө"нөң һәр һанында көнүҙәк темалар, илдәге хәл-ваҡиғалар, йәмғиәтте борсоған мәсьәләләр яҡтыртыла. Беренсе биттәге "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында күтәрелгән һорауҙарҙы, уларға яуап биреүселәрҙе уҡып уйланам. Себер яҡтарына оҙон аҡса артынан киткән ир-егеттәр, ауылдар, телебеҙ яҙмышына битараф ҡалып буламы ни! Гәзит һәр ваҡыт халыҡты борсоған мәсьәләләр буйынса ваҡытында абруйлы шәхестәрҙең аҡыллы һүҙен еткереүе менән дә күңелгә ятышлы, матур башҡорт ғаиләләре, алдынғы һәм эшлекле йәштәр, рухлы балалар тураһында уҡып һөйөнәм. "Киске Өфө" гәзитендә боронғо кәсептәр тергеҙелеүе, белем усаҡтарының ынғай эшмәкәрлеге тураһында уҡып белеп торам. Бына әле Фәрзәнә Аҡбулатованың повесын гәзиттең һәр һанын көтөп алып уҡыныҡ. Хәҙер ауылға яңы нәшер ителгән әҙәби китаптар килеп етмәй бит, шуға гәзиттә хикәйәләр, повестар, шиғырҙар даими баҫылып торһон инде ул.

**(Дауамы 2-се биттә).**



*Баймаҡтар "Киске Өфө"нө ярата.*

12+

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# ТАРИХ ҺӨЙЛӘЙ ГӘЗИТ

**(Башы 1-се биттә).**

Гәзит яҡтыртҡан тағы бер тема - ирҙәренән туҡмалып йәшәүсе ауыл ҡатындары. Ауыл кешеһенә тик ауылдашы ғына ярҙам итә ала, закон һәм полиция менән генә әллә ни ҡырып булмай. Был йәһәттән һуңғы йылдарҙа республикала гөрләтеп эшләп китҡән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының эшмәкәрлеге туҡтамаһын, ауылдаштар бер-береһенә иғтибарлыраҡ һәм ярҙамсылыраҡ булһын, тип теләйем. Ғөмүмән, гәзиттең һәр мәҡәләһененән тәьҫире бар, уйланырға һәм фекер уртаҡлашырға теләк тыуҙырып ҡына тора. Ҡыйыулығын етеп, редакцияға шылтырат, хаттар яҙ ғына...

"Киске Өфө" биттәре беҙгә тарих һөйләй, бына шунан да мөһиме юҡтыр. Ырыуҙар тарихы, Бөйөк Ватан һуғышында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының ҡаһарманлығы ошонда баҫылмаһа, ҡайҙан уҡып белер инек? Бына бер бала саҡ хәтирәм тарихты йәш быуынға һөйләү мөһимлегенә дәлил булыр. Беҙ бала саҡта ҡараған һуғыш тураһындағы фильмдарҙың геройҙары гел урыҫ исемле ине. Шунда бала аҡылым менән Бөйөк Ватан һуғышында тик урыҫтар ғына ҡатнашҡан, тип уйлағанмын. Сөнки башҡа милләттәр фильмдарҙа күрһәтелмәне, ололар һуғыш тураһында һөйләп барманы. Бәхтиһән, әсәйемдең дә, атайымдың да яғынан бик күп туғандарыбыҙ һуғышҡа алынған булған. Атайым 1945 йылда хәрби хеҙмәткә алынып, Япония яғында 1952 йылға тиклем булып ҡайта. Гәзиттең тарихҡа бағышланған биттәре быуындар бәйләнешен тергеҙергә, тамырҙарҙы белергә һәм балаларға үҙ тарихыбыҙҙы һөйләргә, аңлатырға ярҙам иткән бик мөһим тәрбиәүи өлөшө.

Әйткәндәй, тәрбиә йәһәтенән "Киске Өфө" гәзите ныҡлы таяныс: ейән-ейәнсәрҙәрем килеүгә гәзит биттәрен асып, алдарына һалып ҡуям, уҡыһындар, фәһем алһындар, тим. Бына шулай, беҙҙең быуын бәләкәйҙән китап, гәзит-журнал уҡырға күнегеп үҫкән һәм был ғәҙәтте һис тә ташлағы килмәй. Башҡорт халҡының үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген сағылдырған, зиһенде һәм рухты үҫтергән "Киске Өфө" гәзите заман шауҡымында интернет киңлектәренә генә инеп китмәһен, ә ҡағыҙ баҫма булараҡ үҙ эшмәкәрлеген дауам итһен. Беҙҙең яҡта почта хеҙмәте яҡшырҙы, элекке кеүек, гәзит ҡайҙалыр "аҙашып" ҡалмай. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә яҙылайыҡ!

**Тәнзилә ҠОТЛОБАЕВА.**
**Көйөргәҙе районы**
**Кинйәбай ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Ҡараусыһыҙ ҡалған һәм ярҙамға мохтаж ҡарттар яҙмышы өсөн кем яуаплы?

***Фәнүр ЙӘРМӨХӘМӘТОВ, Баймаҡ районы Ярат ауыл хакимиәте башлығы:*** Ер йөҙөндә өлкән йәштәге кешеләр һаны арта бара. Рәсми сығанаҡтарҙа хәбәр ителеүенсә, 60 йәштән өлкәндәр һаны 2017 йылғы 926 млн кешенән 2050 йылға 2,1 миллиардҡа етәсәк, тип фаразлана. Был тәбиғи ҡанундан бер ҡайҙа ла ҡасып булмай, тик шуныһы: ҡарт көнөндә кемде нindәй яҙмыш көтә... Ҡартлыҡ шатлыҡ түгел, тиһәләр ҙә, бәхеткә күрә, ул өлкәндәрҙең барыһына ла ҡағылмай. Хәстәрле ғаиләһе - балалары, ейән-ейәнсәрҙәре менән мәж килеп, улар өсөн кәрәкле һәм ҡәҙерле кеше булып йәшәгән бәхетле ҡарттар улар. Үкенескә, яңғыҙлыҡтан яфа сигеп, ярҙамға һәм хәстәрлеккә мохтаж, ҡараусыһыҙ ауырыу кешеләр ҙә байтаҡ. Ә бит ундайҙарҙың күптәренең балалары, туған-тыумасаһы була тороп та ҡараусылары юҡ. Әсәләренең барлы-юҡлы пенсияһын талап алып, үҙен эт типкеһенә дусар иткән бәғерһеҙ балалары менән йәшәргә лә мәжбүр ҡайһы берәүҙәр. Ярҙамға мохтаж өлкәндәрҙең барыһы ла дәүләт ҡарамағындағы интернаттарға эләгә алмай, унда 1-2-се төркөм инвалидтар, мөмкинлектәре сикләнгән ауырыуҙар ғына алына. Шәхси ҡулдарҙағы пансионаттарҙың да төрлөһө бар: унда йәшәү өсөн пенсионер ҡиммәтерәк түләргә тейеш, йә ундағы персонал тупаҫ, йә йыш ҡына янғын-фәлән сығып, фажиғәләр булып тора. Унан һуң, өлкән кешегә ғүмер буйы йәшәгән урынын, күнегелгән өй шарттарын, бөтөн донъяһын ташлап китеүе лә һәй ҡыйын, шуға күрә, тырышып-тырмашып үҙаллы йәшәү яғын ҡарай улар. Һәм, ғөмүмән, һуңғы ваҡыт был өлкәлә дәүләт сәйәсәтендә лә ошо йүнәлешкә күберәк иғтибар бирелә - уларға йәшәгән ерҙәре буйынса ярҙам ойоштороla: өйгә килеп социаль һәм медицина хеҙмәте күрһәтеү, өлкәндәр проблемаларына йәмәғәт әүҙемселәрен, туғандарын, күршеләрен йәлеп итеү.

Бер мәл шулай ҡарауһыҙ ҡарттарҙы ғаиләгә алыу проекты иғлан ителеп, ыңғай миҫалдар күрһәтелә башлағайны ла, һуңға табан был хаҡта бер ни ҙә ишетелмәй. Уның ҡарауы, ҡалала ла, ауылдарҙа ла яңғыҙ ҡарттарға социаль хеҙмәткәрҙәр беркетелеп, ҙур ярҙам күрһәтелә. Беҙҙең Ярат ауыл биләмәһендә лә өлкәндәргә ошондай төр социаль ярҙам ойошторолған һәм байтаҡтан бирле эшләп килә. Ҡайһы бер урындарҙа ирекмәндәр ярҙамы бар, быны мәктәп уҡыусылары алмаштыра. Элекке Тимур командаһы кеүек эшләйҙәр: утын, һыу ташыйҙар, башҡа хужалыҡ эштәрендә ярҙамлашалар. Ауыл хакимиәте активы тарафынан да өлкәндәрҙең өйҙәренә йөрөп хәлдәрен белешеп тороу гәҙәткә индерелгән, беҙ уларҙы ташламайбыҙ. Ҡулдан килгәнсә ярҙам күрһәтеп торабыҙ.

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ТӘҮҘӘ АЙЫҠТЫРАЙЫҠ ӘЛЕ

**Ҡатын-ҡыҙҙары әхлаҡлы, вайымлы, берҙәм булған ил көслө була. Беҙ, ағинәйҙәр, ошо хәҡиҡәтте тергеҙеү, яңыртыу, асылына яҡынайтыу юҫығында эшләйбеҙ ҙә инде. Шуға ла ағинәйҙәр, сәсәндәр, батырҙар, йола мәктәбен тергеҙеүгә күп көс һалабыҙ һәм тырышлығыбыҙҙың тәүге емештәрен татып йәшәп ятабыҙ.**

Кеше аңлап та өлгөрмәгән баҙар сәйәсәте киңәйеп, бөтә нәмә алып-һатыуға ҡоролған дәүерҙә башҡорттоң үҙенә генә хас сифаты - иленә, теленә тоғролоғо һәм рухи байлығы һаҡланһын, намыҫ тойғоһо емерелмәһен өсөн тергеҙелә бит ошондай ойошмалар. Был ойошмаларҙың үҙәген, һис шикһеҙ, ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итә. Ғөмүмән, башҡорт ҡатын-ҡыҙы боронборондан иле, халҡы мәнфәғәтен ҡайғыртыусы, хәстәрлеүсе көслө әсәй, ғәййәр яугир булған бит. Ирҙәр яуға киткән, ә донъяһын көтөп, балаһын, телен, йолаһын ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ һаҡлап торған. Бөгөн мин ни өсөн һүҙемде ҡатын-ҡыҙҙар тураһында башлайммы? Сөнки яныраҡ ҡына Хәйбулла районы ағинәйҙәре менән аралашып, башҡорт теленең киләсәгенә бәйле борсолоулы һорауҙарға яуап эҙләп, фекер алыштыҡ. Эйе, хәҙер ауылдарҙа ла балаларыбыҙ мәктәпкә рус телле булып килә. Сәбәптәре байтаҡ. Беҙ, ғәҙәттә, атай-әсәйҙәргә, ғаиләгә, мәктәпкә һылтанабыҙ, хатта Хөкүмәтте ғәйепләй башлайбыҙ. Ошо һөйләшеүҙән һуң бик оҙаҡ уйланып йөрөнөм. Шулай ҙа туған тел мәсьәләһенән алда ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың, әсәйҙәрҙең шешә ҡолона әүерелеүе, улар араһындағы әҙәпһеҙлек тураһындағы һорауҙы күтәрергә кәрәк. Әгәр ҙә атаәсәһе урам буйында эсеп йөрөһә, үҙ ғаиләһендә тейешле тәрбиә алмаған балала туған телгә ҡарата һөйөү ҡайҙан барлыҡҡа килһен? Телдең матурлығын ғаиләлә тапмаған бала уны ҡайҙан тапһын да, эскән әсәйҙең балаға телде өйрәтеп ултырыуы теләге ҡайҙан булһын ти инде. Бәлки, бына шунан да киләләр башҡорт теленең бөгөнгө хәле...

Тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыған оло быуын кешеләре лә ебеп ҡала ҡайһы бер осраҡта. Эскән әсәйҙе, өлкән инәйҙе күрһә лә, шуныҡы-быныҡы эсеп йөрөй икән, тиҙәр ҙә, өндәшмәй генә ситләтеп үтеп китәләр. Ә бит борон беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар эсеп йөрөмәгән, эскән бер нисә ир-атты аҡһаҡалдар, старосталар тота белгән. Хатта сыбыртҡылап, тура һүҙ менән тәрбиәләгәндәр. Хәҙер шул тура һүҙ юҡ, ниҙән ҡурҡабыҙҙыр? Әлбиттә, был ағинәйҙәр генә күтәреп, йырып сығырлыҡ эш түгел. Шуға Хөкүмәтебеҙҙең даими рәүештә айыҡлыҡҡа әйҙәгән саралар ойоштороп, хатта тикшереүҙәр үткәреп тороуы әһәмиәтле.

Былар араһында айырыуса "Айыҡ ауыл" республика конкурсының юғары баһалайым, бөтөн Башҡортостан әүҙем ҡушылды уға. Беҙҙең Йылайыр районының Сәләх, Байгужа, Яманһаҙ ауылдары еңеүселәр ҙә булды. Бында, һис шикһеҙ, ауыл кешеләренең берҙәм булыуы, бер маҡсатта - айыҡ тормош алып барыуға ынтылып эшләүе, йәшәүе ҙур роль уйнағандыр. "Урал батыр" эпосындағы: "Яҡшының эскәне һыу булыр, яманның эскәне ыу булыр, тигән һүҙҙәр "Айыҡ ауыл" конкурсының девизы булырға тейештер барыбер". Нисә быуат элек тә халҡыбыҙ ямандыҡтың башы ыуҙа икәнлекте аңлаған, һәм беҙгә ошо фекерҙе халыҡҡа еткереү зарур. Бөтә республика кимәлендә ойошторолған "Айыҡ ауыл" конкурсын "Айыҡ ғаилә", "Айыҡ урам", "Айыҡ аралар", "Айыҡ оло кешеләр" тигән бәләкәйерәк кимәлдәге ярыштарға бүлеп ойоштороу ҙа яҡшы булыр ине. Ни тиһәң дә, айыҡ ғаилә булһа, айыҡ урам да була һәм бынан да берәй фәтүә сығырлыҡ. Тормош айыҡлыҡтан башлана, балаға туған телен өйрәтеү ҙә айыҡ ата-әсәйҙең хәстәрлегенә, аңлы булыуына туранан-тура бәйле, тип иҫәпләйем.

Шуға бына "Тәңкәбикәләр" ағинәйҙәр ҡоронда беҙ халыҡ менән аралашырға, ҡатын-ҡыҙҙар менән осрашырға, әңгәмәләшергә тырышабыҙ. Быуындар араһындағы бәйләнеште һаҡлап, берҙәмлектә айыҡ тормош алып барырға ынтылыш булһа ғына телебеҙ ҙә, мәҙәниәтебеҙ ҙә, йолаларыбыҙ ҙа һаҡланып ҡалыр һәм йәш быуындарыбыҙ әхлаҡлы, халҡының үткәненә, киләсәгенә битараф булмай үҫер. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Фәниҙә ҠОҘАШЕВА,**
**Йылайыр районының "Тәңкәбикәләр" ағинәйҙәр ҡоро ағзаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Радий Хәбиров дәүләт хеҙмәткәрҙәренең эштә үҙен тотошо һәм этикаһы кодексы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе. Яңыртылған указда уға ҡул ҡуйылған көндән алып дәүләт хеҙмәткәрҙәре үҙенең (тормош иптәшенең, балиғ булмаған балаларының) килеме, сығымы, мөлкәте тураһында отчет бирергә тейешлеге хаҡында әйтелә. Указға ярашлы, элеккесә, биләгән вазифаға бәйле бүләктәр, аҡсалата бүләк, ссудалар, хеҙмәттәр алыу, күнел асыуға, ялға, транспорт сығымына түләтеү тыйыла. Тағы бер мөһим пункт - "дәүләт органдары һәм етәкселәр тураһында баһанан, үҙ фекерендә әйтеүҙән тыйылыу".

✔Һуңғы тәүлектә Башҡортостанда коронавирустан тағы өс үлем осрағы теркәлде. Шулай итеп, республикала COVID-19 ҡорбандары 220 кешегә етте. 12 февралгә алты меңдән ашыу кеше инфекция йөрөтөүсе тип иҫәпләнә. Тәүлек эсендә 160 кешелә COVID-19 асыҡланған. Әле 298 пациент ковидгоспиталдәрҙә дауалана. 37 сирленең хәле ауыр тип баһалана, алты пациент үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Республикала һаман да дауахананан тыш пневмония осраҡтары теркәлә. Тәүлек эсендә - 193, ә 108 сирле һауығып сыҡҡан.

✔Башҡортостанда грипп һәм киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләүселәрҙең артыуы күҙәтелә. Республикала 1 февралдән 7-һенә тиклем бөтәһе 24 483 кеше ОРВИ һәм грипп йөҡторған. Был уҙған аҙнаға ҡарағанда 1,2 процентҡа күберәк. Өфөлә 6774 кеше ауырый (14 процентҡа күмегән). "Республикала сир күрһәткесе өлкәндәрҙең ауырыуы иҫәбенә эпидемик сиктән 21 процентҡа юғарыраҡ, Өфөлә - эпидемик сик кимәлендә. Сирләләрҙең яҡынса 50 проценты - 17 йәшкә тиклемге балалар", - тип хәбәр иттеләр Роспотребнадзорҙың матбуғат хеҙмәтенән.

✔Башҡортостанда республика Башлығының Хөкүмәт эшен ойоштороу тураһында бойороғон үтәүгә тотондолар. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Хөкүмәте аппаратының тиҫтәләгән хеҙмәткәре ҡыҫҡартыу тураһында белдереү ҡағыҙы алды. Премьер-министр Андрей Назаров хәбәр итеүенсә, Хөкүмәттә күптән уның структураһын оптималләштереү һәм һөҙөмтәлелеген арттырыу буйынса эштәр алып барыла. Аппараттың ҡайһылыр звеноһы ҡыҫҡартыла, ҡайһылары - үҙгәртеп ҡорола, ҡайһы берҙәре - көсәйтелә.

✓ ***Бабайҙың ике улы бар, береһе күптән инде ҡайҙалыр ситкә сығып олаҡҡан. Икенсеһе Өфө яны ҡасабаларының береһендә йәшәй. Атаһын ҡарау түгел, рәсми органдар саҡыртыуына ла килмәй. Уларға тик аталарының фатиры ғына кәрәк.***



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# НИҢӘ ТАҺИР-ЗӨҺРӘ ТҮГЕЛ?



**14 февраль етер-етмәҫтән рәсәйҙәр, бигерәк тә йәштәр, Ғашиҡтар көнөн байрам итә, ҡотлаша башлай. Бер ҙә ҡаршылыҡ юҡ, әйҙә, ҡотлашһындар, ҡыуанһындар, ғашиҡ булышһындар, ләкин ни өсөн ете диңгеҙ, ете тау аръяғындағы изге Валентин билдәһе аҫтында? Католиктар байрамы ҡайһы арала башҡорт байрамына әйләнеп китте әле ул? Католиктар беҙҙең һабантуйҙың нимә икәнен дә белмәй, мәҫәлән.**

Хәйер, изге Валентиндың да кем икәнен беҙҙәге байрам итеүселәрҙең күбеһе белмәй, моғайын. Беҙҙең үҙебеҙҙең тарихта бына тигән ғишыҡ йондоҙҙары - Таһир менән Зөһрә, Йософ һәм Зөләйха, Ләйлә менән Мәжнүн кеүек боронғо дастан һәм легендалар геройҙары бар. Ләкин улар хаҡында йәштәребеҙҙең күпмеһе генә белә икән? Филология факультеты студенттары белһә лә бик хуп. Ғөмүмән, йәштәребеҙ тормошона бераууыҡтан бирле сит ил байрамдары һәм традициялары үтеп инә башлауы бер кемде лә борсомай. Урыҫ мәҡәлен ауҙарып әйткәндә, бала-саға ни менәндер булышһа, булышһын, тик мыжымаһын ғына. Эйе, әлеге Жириновскийҙың йәштәр өсөн фәхишә йорто асыу хаҡындағы аҡылһыҙ тәҡдиме тап ана шул маҡсатты күҙҙә тота ла инде: йәштәр әллә ни әүҙемләшеп китмәһен, енси һәм физиологик ихтыяждарын ҡандырыуҙан башҡаһы хаҡында уйланмаһын...

Байрамдар хаҡында һүҙҙе дауам итеп, һуңғы йылдарҙа беҙҙә бик популярлашып киткән тағы бер сит ил "ҡунағы" - Хэллоуинды йәштәребеҙ нисек билдәләй, күҙәткәнегеҙ бармы? Инглиз телле илдәрҙә был көн үлектәр йәне ергә ҡайта тип иҫәпләнә. Был байрамдың ҡот осорғос атрибутикалары, монстр, сихырсы, ен-шайтандар образына инеп кейенеп йөрөүҙәрен бөтөнләй ҡабул итеп булмай. Ә йәштәргә барыбер. Дөрөҫөрәге, улар байрам мәғәнәһе хаҡында уйлап та бирмәй, улар өсөн тышҡы эффект мөһим. Был даталар хәҙер уларҙы коммерция йәһәтенән күтәп алыусылар өсөн дә бик йәтеш: магазин кәштәләре беҙҙең менталитетҡа төптө ят тауарҙар, сувенирҙар, значок, открыткалар менән тулы. Шул уҡ ваҡытта ил хәтерендә бер быуат буйы йәшәп килгән Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы көнө - 7 ноябрҙе нисек тиҙ һәм һиҙҙермәй генә юҡҡа сығарып ҡуйҙылар! Йәштәр иһә революция хаҡында ла, уның гениаль юлбашсыһы В.И. Ленин хаҡында ла бер ни белмәй. Ни генә тиһәң дә, совет осорондағы комсомол мәктәбенә еткән бер ниндәй ҙә тәрбиә системаһы юҡ бөгөнгә тиклем, һәм был үҙен торған һайын нығыраҡ һиҙҙерә. Рәсәй Президенты В.Путин ҡурсылаған "Сириус" мәғариф үҙәге менән ирекмәндәр хәрәкәте генә тәрбиәләй алмай бөтөн йәштәрҙе лә. Яңы заманда яңы идеалдар өсөн йәштәребеҙҙе күпләп ылыҡтырған берәй платформалы тәрбиә мәктәбе кәрәк, "Йәштәр партияһы", мәҫәлән. Ил парламентында улар үҙаллы фракция булып, тауыш биреү хоҡуғына эйә була алыр ине. Ә бындай партия ағзалары һүҙендә, ҡылығында хәҡиҡәт нығыраҡ сағылыр ине һымаҡ. Гәзит уҡыусылар ни уйлай икән ошо хаҡта?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Караусыһыҙ ҡалған һәм ярҙамға мохтаж ҡарттар яҙмышы өсөн кем яуаплы?

***Линиза ХӘТМУЛЛИНА, социаль хеҙмәткәр, Өфө ҡалаһы:*** Социаль хеҙмәтләндереү өлкәһендә мин яңы кеше тиергә лә була, ни бары бишенсе йыл эшләйем, ләкин шул ваҡыт эсендә лә ҡарттар тормошо, яҙмышына ҡағылышлы ыңғайға ҡарағанда ярайһы ғибрәтле хәлдәргә шаһит булынды. Минең ҡарамаҡтағы өлкән йәштәгеләр араһында 70-тән 90 йәшкә тиклемге кешеләр бар. Уларҙың бөтәһе лә тип әйтерлек хеҙмәт ветерандары, хәҙер инде инвалидтар. Күпселеге, бәхеткә күрә, камил аҡылдарында, үҙ аяҡтарында йөрөй. Һикһәнгә яҡынлаған ике инәй хатта скандинав таяҡтары менән дуҫтар. Күршеләш йорттарҙа яңғыҙҙар көн күрһәләр ҙә ана шулай бер-береһе менән аралашыу юлын тапҡандар. Береһе сирләп-нитеп китһә, икенсеһе килеп етә һала, сөкөрләшеп сәй эсеп алалар. Ғөмүмән, өлкән йәштәгеләр араһында бер-беренә иғтибар, үҙ-ара ярҙамсыллыҡ тойғоһо ят түгел, уларҙа ниндәйҙер берҙәмлек, коллективизм тип әйтәйемме, традициялары һаҡланған.

Шулай ҙа ҡыҙғаныслы яҙмыштар ҙа етерлек. Мине бигерәк тә 90-ға етеп барған Иван Васильевичтың яҙмышы борсой. Уға килгән һайын, инде ниҙәр булды икән, тип хафаланып ишеген асам. Һуңғы ваҡыт бигерәк биреште: хәтерен юғалта, кеше танымай башланы. Әлдә күршеһе яҡшы кеше - "йәш" пенсионер, электән аралашып йәшәгәндәр. Уға аҫҡыһын биреп ҡуйғанбыҙ. Бер шулай Иван Васильевичты сығып киткән еренән саҡ табып алып ҡайтты. Хәҙер газ йә һыу кранын асып ҡуйып, берәй фажиғә булмаһын тип, бөтөн йорт ҡурҡып тора. Район социаль яҡлау бүлеге уны ҡарттар һәм инвалидтар йортона ебәрергә булып, документтар йүнәтә лә башлағайны, тик ошо фатирҙа теркәлгән балаларының ҡултамғаһы, әллә ризалығымы кәрәк, тип, туҡтап ҡалдылар. Бабайҙың ике улы бар, береһе күптән инде ҡайҙалыр ситкә сығып олаҡҡан, ҡайҙа икәнен дә белеүсе юҡ. Икенсеһе Өфө яны ҡасабаларының береһендә йәшәй. Атаһын ҡарау түгел, рәсми органдар саҡыртыуына ла килмәй. Уларға тик аталарының фатиры ғына кәрәк. Уларға ҡарап тормаҫтан, барыбер бабайҙы ҡарттар йортона урынлаштырырға итәләр, тик урын таба алмайҙар.

Беҙҙәге ҡарттар йорттары хәле үҙегеҙгә лә билдәле: унда мәңге урын юҡ йәки унда эшләгән персоналдың кешелекһеҙ ҡылыҡтары төшөрөлгән ҡот осҡос видеояҙмалар интернет киңлектәрен айҡай; шәхси ҡарамаҡтағы йорттарҙа иһә бер-бер артлы янып үлә ҡарттарыбыҙ. Мин дә белмәйем хәҙер: дәүләт был мәсьәләне үҙ хәстәренә ала алмай икән, ҡарауһыҙ ҡарттар яҙмышы өсөн кем яуаплы? Был өлкәлә сит ил тәжрибәһен ҡарап, һушың китерлек: беҙҙекеләрҙән биш-алты тапҡыр һәм унан да күберәк күләмдә пенсия алалар, был уларға уңайлы, заманса пансионаттарға урынлашырға, теләйҙәр икән, өйҙәрендә ҡалып, яҡшы хаҡҡа яҡшы хеҙмәтләндереүсе персонал ялларға мөмкинлек бирә. Хәтерләйһегеҙҙер әле: бер заман шулай Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары Италияға барып, яңғыҙ ҡарттарға ялланып эшләп, итальяндар әйткәнсә, компаньон - ярҙамсы ла, дуҫ та, серҙәш тә булып аҡса эшләп ҡайталар ине. Ә беҙҙең меҫкен ҡарттарҙы ҡарарға тейешле социаль хеҙмәткәрҙәр көнөнә биш-алты кешене хәстәрләп, хәлдән тайһа ла уның хеҙмәте бик арзан баһалана. Бәләкәй эш хаҡына шундай яуаплы һәм ауыр эшкә ризалашыусылар ҙа һирәк, тиҙәр һуңғы ваҡыт...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ПРӘНИК БУЛДЫ, АХЫРЫ...

**Көн дә бер нисә тапҡыр интернеттың Яндекс яңылыҡтар блогына күҙ һалырға ғәҙәтләнелгән. Был юлы ла шулай иттем һәм киң мәғлүмәт сараларының көн үҙәгендәге бер яңылыҡтан тирә-йүн яҡтырып киткәндәй булды. Аҙаҡ инде хәбәргә ҡуйылған сағыу башты уҡып һемәйеүемде аңланым.**

"Песков пенсиялар күләмен арттырыу буйынса этаплап эш барыуы хаҡында һөйләне", тип атала ине көн хәбәре. Ниһайәт, әллә ысынлап та боҙ ҡуҙғалдымы икән? Тәүге уй шул булды һәм секунд эсендә күҙ алдына пенсионерҙарҙың шатлыҡлы йөҙҙәре килеп баҫты. Әммә... ошо ҡыҫыр хәбәрҙең тәүге һөйләменән үк өмөт һүрелде, томандай таралып юҡҡа сыҡты. Президенттың матбуғат секретары, бөтөн өлкән граждандарға ла бер юлы пенсия арттырырға дәүләттең мөмкинлеге юҡ, тип башлай һүҙен. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ти ул, этаплап пенсиялар арттырыла килә, властар был йүнәлештә эште дауам итә, һәм улар тарафынан гел шул хаҡта һүҙ алып барыла.

Эйе, быныһы раҫ, әйтерең бармы, был турала фәҡәт һөйләнә генә шул әле... Ана бит, власты тынысландырып, "бәүетеп", артыҡ борсолмаҫҡа саҡырып, пенсионерҙар артығын талап итә, тип иҫәпләүселәр барҙа, ниңә артһын ти ул пенсия? Был, мәҫәлән, бай ғына бер ханым - RT телеканалының баш мөхәррире Маргарита Симоньяндың һүҙҙәре.Бынан элегерәк ошо ханым ил пенсионерҙарын аҙ килемдәре менән зарланыуҙары өсөн оялтып та алған, имеш. Һеҙ 90-сы йылдарҙа нисек йәшәнек, шуны онотмағыҙ, тип шелтәләй икән уларҙы. Атаҡ-атаҡ, ә ул 90-сы йылдарҙан алып нисә ғүмер үтте бит инде! Һаман шуны уйлап, ярай әле, бөгөн 2021 йылда йәшәйбеҙ бит, тип ҡул сабырға кәрәкме икән беҙгә? 30 йыл эсендә лә пенсия бер аҙ ғына ла артмаһа, был нимә тип аталыр ине? Был кемдеңдер изгелегенән түгел, ә тәбиғи процесс, ижтимағи һәм дә финанс ҡанундарынан килә. Уның ҡарауы, 90-сы йылдарҙан алып илдә бит миллиардерҙар һаны уғата йылдам артты. Ә был кемдең изгелеге, әллә был да тәбиғи законмы? Ил үҫешендәге, Песков ҡылыҡһырлаған "ҡара һыҙаттар, тиҫкәре осорҙарға" ла ҡарап торманы бит байҙар. Ҡайҙа бында пропорция? Ғәҙеллек батманының бер яғы самаһыҙ еңә башланы түгелме, ә нишләп был хаҡта ләммим? Бәлки, был юҫыҡта ла маҡтанырға кәрәктер, пенсия артты, тип хушланыу һымаҡ? Пенсияны арттырыуға ил тормошонда туҡтауһыҙ осрап торған ҡара һыҙаттар һәм тиҫкәре осорҙар ҡамасаулай, ти матбуғат секретары. Ә бына әлеге миллиардерҙарға был "һыҙаттар", күрәһең, файҙаға ғына - бына ни өсөн бик яй арта беҙҙең пенсия.

Ҡыҫҡаһы, баяғы ҡыҫыр хәбәр сираттағы прәник кенә булып сыҡты, ахыры. "Был йүнәлештә беҙгә әле эшләргә лә эшләргә, уғата оҙон юлдар үтергә кәрәк", тип ҡабынырға ла өлгөрмәгән өмөт осҡонон тамам һүндереп ҡуйҙы секретарь. Ҡыҙыҡ ә, ғөмүмән, кәрәк инеме һуң был хаҡта һүҙ башлау?

**Мәрйәм НИЗАМОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 15 февралдә халыҡҡа диспансеризация үткәрә башлау планлаштырыла. Шулай уҡ Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһы табиптары менән күсмә модулдәр, стоматология бригадалары эшләй. "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһын 19 апрелдә башлау планлаштырыла. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы етәксеһе һүҙҙәренсә, һауа шарттары мөмкинлек бирһә, Башҡортостан буйлап "сәләмәтлек поездары" иртәрәк юлға сығасаҡ.

✓Башҡорт Википедиясыларының онлайн Вики-мәктәбе 20 сәғәтлек "Википедия: ҡыҫҡа танышыу курсы" программаһы буйынса уҡыу өсөн тыңлаусылар йыя башланы. "Тыңлаусылар өсөн уҡыу бушлай. Дәрестәр кис көнө аҙнаһына ике тапҡыр Zoom конференциялар майҙансығында ойошторола. Тәүге дәрес - 1 мартта. Һылтанма һәм конференция залына инеү паролен алыу өсөн сайт аша курстарға яҙылырға кәрәк", - тип һөйләне Башҡорт Википедияһы администраторы Рөстәм Нурыев.

✓Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Ирина Кононова аҙ хәрәкәт иткән граждандар араһында вакцинацияны нисек үткәреүҙәрен һөйләне. Билдәләнеүенсә, социаль учреждениеларҙа, йорт-интернаттарҙа, пансионаттарҙа йәшәүселәр урында прививка эшләтә. Вакцинацияға сиратҡа "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында, "Табипҡа" мобиль ҡушымтаһында йәки doctor.bashkortostan.ru республика сайтында, шулай уҡ 1301 һәм 122 (колл-үҙәк), 218-19-19 (ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге) телефондары буйынса яҙылырға мөмкин.

✓Башҡортостанда йәнә тантаналы шарттарҙа никах теркәргә рөхсәт ителде. Коронавирус сикләүҙәрен йомшартыу 29 ғинуарҙан көсөнә инде. Башҡортостан Республикаһының Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, никах теркәү тантанаһына 10 ҡунаҡ саҡырырға мөмкин. Ләкин граждандарға социаль дистанцияны һаҡларға һәм битлек кейергә кәрәк. Быға тиклем улар 5-тән артмаҫҡа тейеш ине.

✓Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәре Гәүһәр Батталова етәкселегендәге ижади төркөм Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең тормошо һәм ижады тураһында "Ялҡындан һәм хистән ҡойолған..." документаль фильмы төшөргәйне. Был фильм авторҙары Назар Нәжми исемендәге премияға лайыҡ булды.

ҠЫҪҠАСА

# БАШҠАСА БУЛМАЙ

✓ **Башҡортостанда сусҡалар араһында Африка тағуны таралыу хәүефенә бәйле ҡырағай ҡабандарҙы ата башлайҙар.** Уларҙың һаны 4 мең гектарҙа берәүҙән артмаҫҡа тейеш. Сусҡасылыҡ хужалыҡтары тирәләй 10 саҡрым радиуста бер ҡабан да булырға тейеш түгел. Хөкүмәттә уҙған оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шундай бойороҡ бирҙе. Башҡортостанда сир йоҡтороу осраҡтары теркәлмәһә лә, Рәсәй төбәктәрендә хәл көсөргәнешле, тип билдәләне ул. 2021 йылдың бер айында һигеҙ субъектта 18 сығанаҡ асыҡланған. Башҡортостан менән сиктәш Әлмәт районында ла (Татарстан) ауырыу сығанағы табылған. Ҡош киҙеүе буйынса ла хәл тотороҡһоҙ. Татарстан һәм Силәбе өлкәһе хужалыҡтарында - бер нисә осраҡ. Радий Хәбиров шулай уҡ Ветеринар һәм фитосанитар күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан идаралығына хайуандарға һәм ит продукцияһына контролде көсәйтергә ҡушты. Шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙа сусҡаларҙы ялан кәртәгә сығармаҫҡа кәңәш ителде.

✓ **Башҡортостан Рәсәйҙә барлыҡ теплица йәшелсәләренең 60 процентын тиерлек етештергән 10 төбәк иҫәбенә инде, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.** Алдынғы төбәктәр иҫәбендә - Липецк, Мәскәү, Калуга, Волгоград, Новосибирск өлкәләре, Краснодар, Ставрополь крайҙары, Башҡортостан, Татарстан һәм Ҡарасай-Черкес Республикаһы. Илдә теплица йәшелсәләрен етештереүҙең дөйөм күләменән 57 проценттан ашыуы уларҙың өлөшөнә тура килә. Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы күҙаллауынса, быйыл ҡышҡы теплицаларҙа кәмендә 1,45 миллион тонна йәшелсә үҫтереп алынырға тейеш. Был 2020 йылға ҡарағанда 7,6 процентҡа күберәк. 2 февралгә мәғлүмәттәр буйынса, ил теплицаларында 114 мең тоннанан ашыу йәшелсә үҫтерелгән (уҙған йылда иһә 99 мең тонна тиерлек). Былтыр Башҡортостанда 69,4 мең тонна теплица йәшелсәһе йыйып алынған. 2019 йылда ошондай йәшелсәнең уңышы аҙыраҡ - 68,5 мең тонна булған.

✓ **Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетында яңы йүнәлештәр асыла.** 2021-2022 уҡыу йылында бында балалар баҡсалары өсөн башҡорт телен белгән тәрбиәселәр әҙерләй башлайҙар. "Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт, мәктәпкәсә белем биреү", "Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт, башланғыс кластар уҡытыусыһы" тигән ике профилле бакалавриатҡа студенттар ҡабул ителәсәк. "Һәр төркөмдә 14 бюджет урын. Ҡабул итеү имтихандары: рус теле (БДИ), йәмғиәтте өйрәнеү (БДИ), башҡорт теле һәм әҙәбиәте (яҙма). Был йүнәлеште тамамлаған белгестәр милли балалар баҡсаһы тәрбиәселәре, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, милли мәктәптәрҙең башланғыс класс уҡытыусылары, өҫтәмә белем биреү ойошмаларында, мәғариф бүлеге белгестәре, мәктәпкәсә йәштәге белем биреү һәм башланғыс кластар буйынса методист булып эшләй ала", - ти М. Аҡмулла исемендәге БДПУ уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса проректоры Винер Шәйәхмәтов.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ДҮРТЕНСЕ УРЫНДА...

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ғинуар айы буйынса Рәсәй төбәктәре етәкселәре рейтингында дүртенсе урынға сыҡты. "Медиалогия" компанияһы мәғлүмәттәре буйынса ул Волга буйы федераль округы субъекттары етәкселәрен дә уҙып киткән.**

Дөйөм рейтингта беренсе урында Мәскәү мэры Сергей Собянин килә, икенсе - Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев. Өсөнсө урында Санкт-Петербург губернаторы Александр Беглов. Тәүге унау исемлегенә шулай уҡ Чечня башлығы Рамзан Ҡадыров, Түбәнге Новгород өлкәһе губернаторы Глеб Никитин, Ҡырым хакимиәте башлығы Сергей Аксенов, Һамар өлкәһе губернаторы Дмитрий Азаров, Татарстан Президенты Рөстәм Минниханов инә.

Башҡортостан Республикаһы Башлығының юғары рейтингын "Медиалогия" эксперттары уның инициативаһы менән тормошҡа ашырылған ҡайһы бер проекттарҙың федераль кимәлдә фекер алышыуға сығарылыуы һәм республиканың коронавирус таралыуын тотороҡландырыуы менән бәйләй. Иң сағыу мәғлүмәт сәбәптәренең береһе булып "Ковидҡа ҡаршы паспорт" проекты тора. Был документты COVID-19 менән сирләүселәр һәм антиматдәгә эйә булыусылар, шулай уҡ вакцинация үтеүселәр ала. Ул республикаsuccessfully 25 проценты вакинация үткәс ғәмәлгә индереләсәк. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһағанда республика Башлығы шулай уҡ 28 ғинуарҙан төбәктә коронавирус инфекцияһы таралыу һөҙөмтәһендә индерелгән сикләү саралары этаплап алына башлаясағын белдерҙе. Киң мәғлүмәт сараларында уның республиканың Транспорт министрлығын һәм Өфө ҡалаһы мэрияһын 8 ғинуарҙа ҡалаға ингән ерҙә юл сиселешендә башланған ремонтҡа әҙер булмауы буйынса тәнҡите лә киң резонанс тыуҙырҙы.

# ДЕПУТАТ МЕНӘН ОСРАШЫУ

**Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров журналистар менән осрашты һәм үҙе ҡабул итеүҙә әүҙем ҡатнашҡан закон проекттары хаҡында һөйләне.**

- Уларҙың иң мөһимдәренең береһе - өйҙә көс ҡулланыу тураһындағы закон. Ул Оксана Пушкина тарафынан тәҡдим ителгәйне, - тине Зариф Закир улы. - 20-25 процент ҡатын-ҡыҙ үҙҙәренә ҡарата көс ҡулланыу шарттарында йәшәргә мәжбүр, ләкин шуларҙың биштән бер өлөшө генә полицияға мөрәжәғәт итә. Шул уҡ ваҡытта хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт иткәндәрҙең дә 80 проценты ҡурҡыуҙары сәбәпле ғаризаларын кире ала. Был мәсьәләгә дәүләт ҡыҫылырға тейеш тип уйлайым. Бында системалы саралар кәрәк һәм иҫкәртеү эштәре алып барылырға тейеш. Мәҫәлән, көс ҡулланыусыны ул бер ай буйына ҡатыны менән күрешмәһен, уға шылтыратмаһын һәм хәбәрҙәр ебәрә алмаһын өсөн приютҡа күсереп торорға кәрәк.

Депутат шулай уҡ алкоголизмдан мәжбүри дауалау кәрәклеген яҡлап сығыш яһай. "Спиртлы эсемлектәр ҡабул итеү бик күп енәйәттәргә сәбәпсе. Һәм, әлбиттә, бындай хәлдә ҡылынған енәйәт өсөн водитель таныҡлығынан мәхрүм итеү генә етмәй. Әгәр кеше алкоголик икән, ул документһыҙ ҙа руль артына ултырып сығып китә һәм башҡалар ғүмеренә хәүеф тыуҙыра, - ти Зариф Байғусҡаров.- Әгәр кеше бер нисә тапҡыр шундай енәйәт ҡыла йә өйҙә көс ҡуллана икән, уға табип тикшереүе үткәрергә кәрәк. Һөҙөмтәлә уның алкоголгә бәйлелеге асыҡланһа, уны мәжбүри дауаларға кәрәк..." Дәүләт Думаһы депутаты ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре тарафынан туҡтатылған иҫерек водителгә машинаһын ул штраф түләгәс кенә ҡайтарып бирергә тәҡдим итә. Әлеге көндә юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен яуыздарса боҙған күпселек водителдәр штраф түләмәгән көйө лә машиналарында елдереүҙәрен дауам итә. Әйткәндәй, иҫерек водителдең транспорт сараһын тартып алыу тураһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың закон сығарыу башланғысы буйынса ла фекер алышыуҙар бара.

Депутат айныҡтыҫтар эшенең дә ҡайһы бер нескәлектәренә лә туҡталды. "Башҡортостанда һәм, ғөмүмән, тотош Рәсәй буйынса ла иҫерек килеш бик күп кеше туңып үлә. Йә булмаһа, ошо сәбәпле инвалид булғандарҙы беҙ үҙебеҙҙең һалым аҡсаһына аҫрап киләбеҙ. Бәлки, беҙгә тәүҙән уҡ уларҙың ғүмерен һәм һаулығын һаҡлау өсөн эшләү яҡшыраҡтыр?" - тип үҙ фекерен белдерә З.Байғусҡаров һәм айныҡтыҫтарҙың унитар предприятиелар рәүешендәге социаль учреждениелар булырға тейешлеген билдәләй.

# СИЛӘБЕЛӘ БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты Башҡортостан Башлығы гранты конкурсында күрше төбәктәрҙә Башҡорт йәкшәмбе мәктәптәрен асыу проекты менән еңеү яуланы.**



Ошо уңайҙан Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығының Милли мәғариф идаралығы начальнигы Булат Зинуров етәкселегендәге делегация Силәбе өлкәһендә район һәм ҡала хакимиәттәре менән осрашыуҙар уҙғарҙы. Ҡыҙыл районында һәм Магнитогорск ҡалаһында йәкшәмбе мәктәптәрен асыу мәсьәләһе тикшерелде. Тәү сираттағы ойоштороу мәсьәләләре, артабанғы эш йүнәлештәре билдәләнде. Әлеге ваҡытта Арғаяш районының күпселек мәктәптәрендә, быйылғы уҡыу йылынан Ҡоншаҡ районының биш мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыла. Шулай уҡ Мейәс һәм Магнитогорск ҡалаларында, Ҡыҙыл районында башҡорт йәкшәмбе мәктәптәрен асыу хаҡында килешеүҙәр төҙөлдө. "Башҡорт йәкшәмбе мәктәптәре урынындағы мәктәптәрҙә асыла. Йәкшәмбе мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, башҡорт мәҙәниәте һәм тарихы дәрестәре, ҡурай һәм бейеү түңәрәктәре ҡаралған. Дәрестәрҙе урындағы уҡытыусылар менән берлектә Учалы һәм Әбйәлил райондары, Сибай ҡалаһының республика гимназия-интернаты уҡытыусылары ойоштора. Башҡорт йәкшәмбе мәктәптәренең эшен март айында башлап ебәрергә ниәтләйбеҙ", - ти Булат Зинуров. Уның билдәләүенсә, башҡорт телен күрше өлкәләрҙә дүрт меңдән ашыу уҡыусы өйрәнә һәм бында ыңғай динамика күҙәтелә. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиадала ҡатнашыусыларҙың географияһы киңәйә. Быйыл ҡатнашҡан 734 уҡыусы араһында 26 күрше төбәк уҡыусылары ла бар ине. Киләсәктә башҡорт йәкшәмбе мәктәптәре балаларҙы ғына түгел, ата-әсәләрҙе лә берләштергән башҡорт мөхите үҙәктәренә әүерелер, тип күҙаллана.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Башлығы, сиктәр асылғас та, "Өфө - Вена" авиарейстарының яңынан башланыуы тураһында хәбәр итте. Радий Хәбировтың "Ютэйр" етәксеһе Андрей Мартиросов менән осрашыуында ошо хаҡта килешеүгә өлгәшелде. Радий Хәбиров Рәсәй буйлап осош программаһын киңәйтеү өҫтөндә эшләүҙәре тураһында ла хәбәр итте. Әлегә дүрт ҡалаға осоштар тикшерелә.

✓Өфөлә тыуып үҫкән күренекле яҙыусы, журналист Сергей Довлатовтың тыуыуына 80 йыл тулыу уңайынан 2021 йылда төрлө саралар ойошторола. Башҡортостан Башлығы Бойороғона ярашлы, Сергей Довлатовтың "Ремесло" повесы башҡорт теленә тәржемә ителә. Ҡала Советы Өфө урамдарының береһенә Сергей Довлатовтың исемен биреү тураһында мәсьәләне ҡарарға тейеш.

✓Өфө мэры Сергей Греков оператив кәңәшмәлә баш ҡала хакимиәтендә бер юлы ике кадрҙар үҙгәреше тураһында хәбәр итте. Артур Низамов Тышҡы реклама һәм мәғлүмәт идаралығы директоры итеп, Владимир Смирнов Өфөнөң Балалар һәм диетик туҡланыу үҙәге директоры итеп тәғәйенләнде.

✓Өфөлә ҙур һәм айырыуса ҙур күләмдә мутлашҡан "Five Stars" турагентлығы директоры Гөлнара Яфаева хөкөм ителде. Баш ҡаланың Октябрь районы суды уны биш йылға дөйөм режимдағы колонияға ебәрҙе. Бынан тыш, Гөлнара Яфаеваға килтерелгән зыян суммаһын ҡапларға кәрәк. Суд тикшереүе барышында 54 йәшлек Яфаева туристарҙы 24 миллион һумға алдауын таныны. 2017-2018 йылдарҙа директор Төркиәгә, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә, Сочиға һәм башҡа популяр йүнәлештәргә юлламалар һатҡан.

✓Өфөнөң "Биатлон" спорт комплексында юниорҙар араһында биатлон буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары башланды. Башҡортостандың баш ҡалаһына Мурманск, Ульяновск өлкәләренән, Байкал аръяғы крайынан һәм Башҡортостандан 19-21 йәшлек 30 спортсы килде. Беҙҙә шәп ярыштарҙы ҡабул итә алған бына тигән биатлон комплексы бар. Биатлонсыларыбыҙ Максим Чудов, Антон Бабиков, Эдуард Латиповтарҙың еңеүҙәре лә һәр кемгә таныш.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Әгәр бала 2020 йылдың 1 июленән һуң донъяға килһә, үҙаллы ғариза бирергә кәрәк. Ғаризаны 2020 йылдың 18 декабренән һуң тыуған балаларға ла 2021 йылдың 31 мартына хәтлем бирергә мөмкин.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# БЕР ҠУЛСАЛА ӘЙЛӘНӘБЕҘ

**Ҡала - бәләкәй дәүләт булһа ла, унең мәшәҡәттәре лә айырым бер ғаиләнекенә оҡшаш: бер урынды бөтәйтеүгә, икенсе урынға ремонт кәрәк, унаһының осона сығыуға өсөнсө мәсьәлә килеп тыуа һәм тормош шул бер ҡулсала әйләнгәндәй тойола.**

Яңы уҡыу йылы башланған осорҙа белем усаҡтарында балаларҙы йылы аш менән тәьмин итеү торошо буйынса геү килеп маҡтандыҡ та, бер аҙға был тема онотолоп торҙо һәм ҡабаттан килеп сыҡты: социаль селтәрҙәрҙә уҡыусыларҙың туҡланыу сифатына зарланыуы тураһында ата-әсәләрҙең яҙмалары күренә башланы. Республика Башлығы Радий Хәбиров та БР Хөкүмәтендәге кәңәшмәлә был мәсьәләгә иғтибар йүнәлтте. Ҡала хакимиәтендәге сираттағы видео бәйләнеш форматындағы оператив кәңәшмәлә лә был турала һүҙ булды.

Шулай уҡ көн тәртибенә тағы әһәмиәтлерәк - коммуналь хеҙмәттәр темаһы сығарылды, был юлы айырым категория граждандарҙың торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрен компенсациялау ҡаралды. Халыҡты социаль яҡлау республика үҙәге директоры Николай Калмацкий белдереүенсә, айлыҡ аҡсалата компенсация (ЕДК) льгота менән файҙаланыусыларҙың 11 категорияһына бирелә һәм баш ҡалала был хеҙмәт менән 121 мең кеше файҙалана. Компенсация түләүҙең үҙенең талаптары бар - коммуналь түләүҙәр буйынса бурыс булырға тейеш түгел, бурыс булған осраҡта компенсация биреү туҡтатыла. Уны ҡабаттан ала башлау өсөн бурысты түләп бөтөргә йәки торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеүсе ойошмалар менән уны түләү буйынса килешеү төҙөргә кәрәк. Быйыл июлдән компенсация түләү коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр буйынса һуңғы өс йылда йыйылған бурыс буйынса суд ҡарары булғанда ғына туҡтатыласаҡ.

Өфөлә генә түгел, тотош илдә төп проблема булып юлдар торһа, икенсе көнүҙәк мәсьәлә - транспорт хеҙмәтләндереүе. Бөгөн ҡала халҡын "Башавтотранс" ДУП-ы, Электротранспорт идаралығы МУП-ы, ете яуаплылығы сикләнгән ширҡәт һәм өс шәхси эшҡыуар транспорт менән хеҙмәтләндерә, уларға 120 маршрут буйынса эшләргә рөхсәт бирелгән. Хакимиәт башлығы урынбаҫары - Өфө ҡалаһының Транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы Әсҡәт Хәйруллин белдереүенсә, былтыр комиссияның 5 ултырышы уҙғарылған һәм өс автобус, бер троллейбус маршруты алынған, ете автобус һәм бер троллейбус маршруты үҙгәртелгән, ике маршрутта транспорт саралары һаны арттырылған, биш маршрутта урта һәм ҙур класлы автобустар индерелгән. Былар барыһы ла пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереү кимәлен яҡшыртыу маҡсатында тормошҡа ашырыла. Һуңғы йылда ғына "Башавтотранс" ДУП-ының 205 яңы автобус һатып алыуы, уларҙың физик мөмкинлектәре сикле категорияны һәм балалар коляскаһы менән ингән пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереү ҡорамалдары менән йыһазландырылыуы ла быны раҫлай. Бары тик яҡшылыҡты ла ваҡытында күрә һәм рәхмәтле була беләйек.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*



# ТИҘЛӘТЕҮ ӨСӨН

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тәүге уҡыуҙа инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләрҙең ер алыу өсөн документтарын рәсмиләштереүҙе ябайлаштырыу тураһында закон ҡабул итте.**

Халыҡ һайланыусылары тейешле белешмәләр йыйыуҙы компетентлы органдарға тапшырырға йыйына. "Участка алыу өсөн инвалидлыҡ тураһында документтарҙы ата-әсәләр үҙҙәре йыйырға тейеш ине. Аңлашыла, был ваҡыт, көс һәм аҡса талап итә. Даими иғтибарға һәм тәрбиәгә мохтаж инвалид бала ҡараған кешеләрҙән быны талап итеү дөрөҫ түгел. Бюрократик ҡатмарлыҡтарға бәйле граждандарға участка алыу ҡыйынлаша", - тип иҫәпләй Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Башҡортостан парламенты спикеры белдәләүенсә, ер биргән органдарға ведомство-ара эш итеү барышында документтар йыйыу тиҙерәк һәм еңелерәк, шуға күрә был участканы рәсмиләштереүҙе тиҙләтергә тейеш.

# ҒАРИЗА БИР

**2021 йылдың 31 мартына тиклем ЗАГС органдарында балаларының тыуыуын теркәгән ғаиләләргә бер тапҡыр бирелә торған 5 мең һумлыҡ түләүгә ғариза ла алып барырға кәрәк.**

Быны дәүләт хеҙмәттәре порталында йәки Пенсия фондының клиенттар хеҙмәтендә лә эшләргә мөмкин. Аҡса 7 йәшкә тиклемге балаларҙың ата-әсәһенә, уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алыусыларға, опекундарға һәм попечителдәргә бирелә һәм ғаиләләге һәр балаға 5 мең һум тәшкил итә. Былтыр декабрҙә Пенсия фонды 2020 йылда 3 йәшкәсә балаларға айлыҡ түләү йәки 3-16 йәшлек балаларға бер тапҡыр бирелә торған түләү алған бөтә ғаиләләргә автоматик рәүештә өҫтәмә аҡса күсерҙе. Әгәр бала 2020 йылдың 1 июленән һуң донъяға килһә йә иһә ата-әсә балаларға аҡса алыу өсөн мөрәжәғәт итмәһә, үҙаллы ғариза бирергә кәрәк. Ғаризаны 2020 йылдың 18 декабренән һуң тыуған балаларға ла 2021 йылдың 31 мартына хәтлем бирергә мөмкин.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЙОРТТАР АЛЫНА

✓ **Өфө ҡалаһы хакимиәте Галле ҡалаһы урамы сатынан Ағиҙел йылғаһы аша күперҙән тоннелгә табан, шулай уҡ Ҡариҙел йылғаһы аша күпер төҙөү өсөн Октябрь һәм Совет райондарындағы ерҙәрҙе, торлаҡ һәм торлаҡ булмаған шәхси йорттарҙы үҙенә ала. Был хаҡта хакимиәттең рәсми сайтында хәбәр ителә.** Был яңылыҡ Комсомол, Галле ҡалаһы, Ҡаҙан, Бессонов, Оборона, Район, Төньяҡ, Мурманск, Дмитриев, Ҙур Шелководная һ.б. урамдарындағы 100 самаһы милек хужаһына ҡағыла һәм өс йыл дауамында тормошҡа ашырыласаҡ. Хакимиәт милкенә күскән объекттар баҙар хаҡтары буйынса баһаланасаҡ, уларҙың хужаларына компенсация түләнәсәк. Рөхсәтһеҙ төҙөлгән милек баһаланмаясаҡ. Ҡалаға көнсығыштан инеү юлы ҡала аша М5 һәм М7 трассаларын тоташтырасаҡ, был Ҡариҙел йылғаһы арьяғын үҫтереүгә ярҙам итәсәк, транспорт трафигының билдәле бер өлөшөн үҙенә аласаҡ. Объект 2023 йыл һуңында ҡулланыуға тапшырыла.

✓ **Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Сергей Греков "Ҡарлы Өфө" интерактив картаһында граждандар ҡалдырған мөрәжәғәттәр буйынса урамдарҙы ҡарҙан таҙартыу эшен йәнләндерергә ҡушты.** "Был ҡар таҙартыу ғына түгел, был - өфөләрҙең власҡа һәм бер-береһенә ышанысы мәсьәләһе лә", - тине ул оператив кәңәшмәлә. 27 ғинуарҙан 8 февралгә тиклем интерактив картала барлығы 3,1 мең ғариза теркәлгән. Уларҙың 1,8 меңе, йәғни 62 проценты буйынса сара күрелгән, 300 мөрәжәғәт кире ҡағылған. Иң күп мөрәжәғәттәр Октябрь һәм Киров райондарынан килгән. Интерактив картаға һылтанма ҡала хакимиәте рәсми сайтының баш битендә урынлаштырылған.

✓ **Башҡортостандың баш ҡалаһы Рәсәйҙең Көнсығыш Африка менән дуҫтарса мөнәсәбәттәр урынлаштырған икенсе ҡалаһы буласаҡ.** Джибутиҙағы Рәсәй илсеһе Михаил Голованов белдереүенсә, былтыр ғинуарҙа шул уҡ атамалы дәүләттең ҡала мэры Рәсәй ҡалаларының береһе менән туғанлашыу үтенесе менән мөрәжәғәт итә. Конкурста Өфө ҡалаһы һайлап алына. Әлеге ваҡытта Өфөнөң туғыҙ туғандаш ҡалаһы бар: Анкара (Төркиә), Галле, Саксония-Анхальт Ере (Германия), Шэньян, Ляонин провинцияһы (Ҡытай), Цицикар, Хэйлунцзян провинцияһы (Ҡытай), Хэфэй, Аньхой провинцияһы (Ҡытай), Наньчан, Цзянси провинцияһы (Ҡытай), Нур-Солтан (Ҡаҙағстан), Бишкәк (Ҡырғыҙ Республикаһы), Минск (Беларусь).

✓ **Социаль селтәрҙәрҙә һәм матбуғатта әүҙем тикшерелгән Өфө дәүләт авиация техник университетын Башҡорт дәүләт университеты менән берләштереү мәсьәләһен күптәр ике вуздың коллективын һәм мөлкәтен бергә ҡушыу процесы итеп ҡарай.** Өфө дәүләт авиация техник университеты ректоры Сергей Новиков юғары уҡыу йорттарын берләштереү тураһында идеяны ыңғай баһалай. Унең билдәләүенсә, Рәсәйҙә һәм донъяла юғары уҡыу йорттары араһында конкуренция бара. "Бөгөн республика вуздарына Мәскәү университеттарына тиңләшеү ауыр. Әлбиттә, яҡшы һөҙөмтәләргә ирешеү йылдан-йыл ҡатмарлаша, - ти Сергей Новиков. - Үҙебеҙҙең фәнни, кадрҙар ҡеүәтен берләштерһәк, фән дә ҡеүәтләнә. Кафедралар, тикшеренеүселәр, ғалимдар үҙ-ара эш итә башлаһа, ҡыҙыҡлы варианттар булырға мөмкин. Шуға был, һис шикһеҙ, ҡыҙыҡлы һәм перспективалы идея тигән фекерҙәмен. Әлегә аныҡ ваҡытын билдәләмәйбеҙ". Юғары уҡыу йорттарын берләштереү тураһында ҡарарҙы университеттарҙың ғилми советтары ғына ҡабул итергә мөмкин.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бәүелде тота алмау

❖ Һары мәтрүшкә һәм һарыгүҙ (золототысячник) үләндәрен бер тигеҙ миҡдарҙа үлсәп ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 6-8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Балаға 19 сәғәттән һуңға ҡалдырмай бөтә төнәтмәне эсереп бөтөрөргә. Шунан һуң эсермәҫкә. Дауаланыу осоро - 1 ай.

### Түбән кислоталылыҡ

❖ Ашҡаҙандың кислоталылығы түбәнәйһә юл япрағы бешкән һыуҙы эсергә кәрәк. Ҡайнатманы һыуытып, ашарҙан 10-15 минут алда эсергә.

### Быуындарҙы таҙартыу

❖ 5 ҡалаҡ ҡарағай ылыҫы, 3 ҡалаҡ гөлйемеш, 2 ҡалаҡ һуған ҡабығына 1 литр ҡайнар һыу кәрәк. 10 минут ҡайнатып, һөҙөргә һәм ярты сәғәт төнәтеп, көндөҙ ашарҙан алда 2-3 тапҡыр һәм төнгөлөккә 1 тапҡыр 100-әр грамм эсергә.

### Баш ауырыһа

❖ 1 ҡалаҡ болон туҡранбашын 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ярты сәғәт торорға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ярты-шар стакан эсергә.

❖ Көнөнә 3 тапҡыр сирек стакан яңы әҙерләнгән ҡарағат һуты эсергә.

### Цистит

❖ 200 грамм миләште 0,5 литр һыуға һалып 2 сәғәт ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 20-30 мл эсергә.

❖ 10-15 грамм юл япрағы орлоғон 1 стакан ҡайнар һыуҙа бешерергә, 1 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Төнгөлөккә эсеп ятырға.

### Ашҡаҙан язваһы

❖ Ашҡаҙан һәм бөйән язвалары ауырыуҙарын дауалау өсөн 1 ҡалаҡ ваҡланған андыҙ тамырына 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ 1-2 ҡалаҡ балан емешен киләлә төйөп, аҡрын ғына 200 мл ҡайнар һыу өҫтәп ҡойорға, 4 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ "Ырыуҙар йыйыны" проекты тыуған ерҙе, тамырҙарҙы өйрәнеүгә ҙур этәргес бирә. Киләсәк матур һәм яҡты булһын өсөн беҙ үҙебеҙҙең үткәнебеҙҙе төплөрәк өйрәнергә һәм белгәндәребеҙҙе йәш быуынға еткерергә тейешбеҙ".*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



## БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Башҡорттарҙа туҡыу станоктары "киндер урыны", "урынағас" тип йөрөтөлгән һәм бер төрлө булған - арҡыры, тәбәлдерек (подножка) ярҙамында эшләтелгән. Арҡауҙы үткәреү өсөн тәбәлдерек ярҙамында көрөҫтәрҙе (нитченка) алмаш-тилмәш мендереп-төшөргәндәр, был буйғауҙың таҡ һәм йоп ептәре араһында арауыҡ барлыҡҡа килтергән һәм арҡауҙың күсеп йөрөшөн тәьмин иткән. Әммә территорияла таралған киндер урындарының төҙөлөш буйынса айырмалыҡтары булыуы уның үҫеш кимәле төрлөлөгө хаҡында һөйләй. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында борондан тар шөйтөлө (навой) киндер урыны ҡулланылған, уның нигеҙен тәшкил иткән рамы - урын ағасы һәм артҡы шөйтөһө булмаған. Шуға был төр станокты кәртәлә йәки лапаҫ аҫтына ҡороп ҡуйыу өсөн бер нисә ҡолға ла еткән. Былай киндер урынында эшләгәндәрен Баймаҡ районының Күсәй ауылында 1958 йылғы экспедиция барышында осратҡандар. Киндер урынын йәйләүгә алып сығыуы ла, өйҙә урынлаштырыуы ла еңел булған. XVIII быуатта И.Г. Георги көньяҡ башҡорттарҙың киндер урынын ентекле һүрәтләп яҙған: "Буйғау ултырғысҡа баҫтырып беркетелгән ҡолға тирәләй уратылған. Шөйтө иҙән һәм һайғау араһында ҡыҫтырылған ике ҡолға араһында йөрөтөлә, ат ҡылынан эшләнгән көрөҫ һайғауға беркетелгән. Көрөҫтө хәрәкәткә килтереү өсөн аяҡ менән баҫырға уңайлы педаль - тәбәлдерек эшләнгән, йәки аяҡҡа элергә уңайлы итеп епте элмәгә төйгәндәр". Башҡорт станоктары үҫешкән төрҙәр рәтенә ҡараған, былай ике көрөҫлө һәм тәбәлдерекле киндер урындары Евразия материгында Азия ҡул станоктары таралған ерҙәрҙән көньяҡтараҡ һәм көнбайыштараҡ йәшәгән төрлө халыҡтарҙа ҡулланылған.



*Урын ағасы блулмаған тар шөйтөлө киндер урыны (БР, Баймаҡ районы, Күсәй ауылы). Г.И. Мөхәмәтшин һүрәте, 1958*



*Силәбе башҡорттарында урыҫ станогы. И.Г. Мөхәмәтшин һүрәте, 1959.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*

# РУХ БАЙРАМЫ,

## йәки Балыҡсыларҙың ырыу гимнын һәм гербын ҡабул иткәне

**Аҫҡын районында "Башҡорт тарихы йылы: данлы тарих - ғорур вариҫ" саҡырыуы аҫтында балыҡсы ырыуы башҡорттары ҡор йыйҙы. Сарала Аҫҡын районының балыҡсы ырыуы вариҫтары йәшәгән Урмияҙ, Яңы Ҡушкилде, Иҫке Ҡушкилде, Кубияз, Ҡашҡа, Әмир, Билгеш, Гөмбә, Солтанбәк, Сураш, Кәмәшиҙе, Үршиҙе, Көнгәкбаш, Ташлыкүл, Ҡариҙел районының Муллаҡай, Яңы Муллаҡай, Түбәнге һәм Үрге Балмаҙы ауылдарынан делегаттар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр, шулай уҡ баш ҡаланан эксперттар, тарихсылар, тел белгестәренән тыш, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Эльвира Айытҡолова менән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡупов та ҡатнашты.**





*Штандарт - яңауылдарҙа.*

Ҡунаҡтарҙы, боронғо йола буйынса, ырыуҙың аҡһаҡалдары ҡаршы алды һәм ошо мәртәбәле йыйынға фатихаларын биреп, йәш быуынды тарихи тамырҙарыбыҙҙы, телебеҙҙе, нәҫел шәжәрәләрен өйрәнергә саҡырҙы. Тормош ҡотон һаҡлаусы ағинәйҙәр милли ризыҡтарҙан ауыҙ иттерҙе. Ҡунаҡтар аҡ кейеҙгә баҫтырылды, милли кейемдәрҙәге егеттәр уларға ерҙе, йәнде, сәләмәтлекте һаҡлар бетеү - ырыу тамғаһы бүләк итте. Баш ҡала ҡунаҡтары ҙур ҡыҙыҡһыныу менән балыҡсы ырыуы башҡорттарының тарихи үҙенсәлектәрен сағылдырған уникаль этнографик материалдар, тормош-көнкүреш әйберҙәре менән йыһазландырылған тирмәне ҡараны. Тирмә эргәһендә Ҡариҙел районы делегацияһы ла йыйынға килеүселәрҙе ихлас ҡаршылап, үҙҙәренең көнитмеше, нәҫел тарихы тураһында ҡыҫҡаса бәйән итте.

Сараның тантаналы өлөшөндә сценарий авторы Марс Сәйетғәлин һәм режиссер Редик Ғәниев етәкселегендә районлдың мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре балыҡсы ырыуының барлыҡҡа килеү тарихын сәхнәләштерҙе. Ваҡыт дарьялары аша быуындар бәйләнеше сағылыш алды: Майҡы бей, уның улдары Ҡара Табын бей, Байҡы бей, Балыҡсы бей бынан теүәл һигеҙ быуат элек булған тарихи ваҡиғаларҙы, Сыңғыҙхандың нисек итеп Майҡы бейҙе ошо ерҙәрҙең хужаһы итеп танып, уға тамға, оран, ырыу ағасы һәм ҡошо кеүек ырыу символдары тапшырыуын бәйән итте. Балыҡсы ырыуының йәш вариҫтары бөтә майҙан ҡаршыһында, батырҙарыбыҙ рухы алдында тыуған еребеҙгә, туған телебеҙгә, ата-бабаларыбыҙ аманатына мәңге тоғро ҡалырға ант итте.

Шундай юғары рухлы, илһөйәрлек, телһөйәрлек менән һуғарылған прологтан һуң сараның фәнни-ғәмәли өлөшө башланды. Аҫҡын районы хакимиәте башлығы Ришат Марат улы Дихин мәртәбәле ҡорҙа ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, йыйындың оло әһәмиәтен билдәләне һәм: "Ырыуҙар йыйыны" проекты тыуған ерҙе, тамырҙарҙы өйрәнеүгә ҙур этәргес бирә. Бары тик үҙ халҡының тарихын төптән белгән кешенең генә киләсәге бар. Ошо киләсәк матур һәм яҡты булһын өсөн беҙ үҙебеҙҙең үткәнебеҙҙе мотлаҡ белергә, төплөрәк өйрәнергә һәм белгәндәребеҙҙе йәш быуынға еткерергә тейешбеҙ", - тине. Артабан сығыш яһаусылар балыҡсы ырыуы башҡорттарының тарихы, үҙенсәлеге, билдәле шәхестәре, фольклоры һәм диалекты, ошо диалект шарттарында башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәре хаҡында сығыш яһаны. Шулай уҡ тел мәсьәләһенә лә туҡталып, телселәр төньяҡ-көнбайыш һөйләшенең фонетик һәм морфологик яҡтан да әҙәби башҡорт теленә ныҡ яҡын булыуын, хатта лексик составында күбеһенсә саф башҡорт һүҙҙәре булыуын билдәләне. "Балыҡсы башҡорттарының теле башҡорт теленең тәбиғи ысын сағылышы булып тора. Ул ғына ла түгел, балыҡсылар теле үҙгәрмәгән, боронғолоғон һаҡлаған бай тел", - тине үҙенең сығышында Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусыһы Исҡәндәр Сәйетбатталов.

Йыйын барышында Балыҡсы ырыуының геральдик ҡанундарға яраҡлаштырылған гербы менән таныштырып, уға һалынған мәғәнәне аңлаттылар. Гербта ырыуҙың боронғо атрибуттары: тамға, ҡарағош, ҡарағас ағасының ботағы, "Салауат" ораны төшөрөлгән. Гербтың ҡырҙарын торҡа һәм һайман биҙәй - был хәрби кейем элементтары ырыу тарихының Сыңғыҙханға барып тоташыуын һүрәтләй. Алтын төҫтә төшөрөлгән ҡәлғә ырыуҙың атамаһынан килә, сөнки "балыҡсы" һүҙе ырыу исемендә күптәр уйлағанса балыҡ аулап кәсеп иткән халыҡты түгел, ә "ҡала һаҡсылары" тигәнде аңлата. Был герб Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында эшләп килгән махсус геральдик комиссия тарафынан тәҡдим ителде.

Бик фәһемле һәм һөҙөмтәле, эшлекле үткән йыйынға йомғаҡ яһап, делегаттар 13 кешенән торған ырыу советын һайланы һәм ойошманың ҡарарын, ырыуҙың гербын һәм билдәле яҡташыбыҙ, танылған композитор Рәүфә Нурмөхәмәтова ижад иткән йырҙы ырыу гимны итеп ҡабул итте. Балыҡсы ырыуы башлығы итеп бер тауыштан Наил Хәйруллин һайланды. Ырыуҙар йыйыны штандарты тантаналы рәүештә Уран ырыуы вәкилдәренә тапшырылды. Тимәк, сираттағы йыйын Яңауыл ҡалаһында үтәсәк. Былай сараларҙы артабан Унлар, Ҡаңлы ырыуҙары ерендә лә үткәреү ҡарала.



*Ҡариҙел уҙаманы Ф. Сафин.*



*"Киске Өфө" бүләген алған ҡыҙҙар.*

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Киске Өфө" гәзите Аҫҡын һәм Ҡариҙел райондары балалары араһында "Минең шәжәрәм" тигән ғилми эштәр конкурсы иғлан иткәйне. Конкурс әле лә дауам итә, әммә баҫманың баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева нәҫел ептәрен барлап, шәжәрәләрен төҙөп, ғилми-тикшеренеү эштәрен тамамлаған ике уҡыусыны - Аҫҡын урта мәктәбенең 6 -сы класс уҡыусыһы Камилла Сәлмәнова менән Урмияҙ мәктәбенең 5-се класс уҡыусыһы Алина Усманованы, шулай уҡ башҡорт милли кейем оҫталарының "Тамға" халыҡ-ара конкурсында ҡатнашыусы, балыҡсы ырыуы ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемен тергеҙеүсе әүҙем ағинәй Мәмдүнә Зарипованы тәбрикләп үтте һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы.**

**Наилә ИМАЕВА.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

12

# Ғаиләм-ҡәлғәм

13-19 февраль (шаҡай)
2021 йыл
№7 (945)

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ ҒАИЛӘЛӘРЕ...

## дәрәжәле бәйге тотто

**Башҡортостанда "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсы бара. Конкурс "Етегән" республика башҡорт байрамы сиктәрендә ойошторолған. Хөкүмәт вице-премьеры Азат Бадранов рәйеслегендә конкурсҡа әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты төҙөлгән.**

Саҡмағош, Мәләүез, Илеш, Күгәрсен, Ҡыйғы, Кушнаренко райондары хакимиәттәренә конкурсты үткәреүҙә ярҙам күрһәтергә тәҡдим ителде. Әле Саҡмағош, Мәләүез, Илеш һәм Күгәрсен райондарында онлайн-форматта конкурстың зона этабы үтте. Жюри ғаиләләрҙең ижади презентацияһын ҡарап, финалсыларҙы билдәләне.

Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығында белдереүҙәренсә, Саҡмағош районында ҡатнашыуға ғариза биргән 11 ғаиләнән Бүздәк районынан Кәримовтар, Саҡмағош районынан Ильясовтар һәм Әлшәй районынан Ҡотлозамановтар конкурстың республика этабына үтте. Мәләүез ҡалаһында 12 ғаиләнән жюри Стәрлетамаҡтан Ишмөхәмәтовтарҙы, Мәләүез районынан Суҡбаевтарҙы һәм Миәкә районынан Ғәниевтарҙы һайлап алды. Илеш район мәҙәниәт йортонда Илеш районынан ике ғаилә финалға сыҡты. Улар - Шәрәфетдиновтар һәм Әхмәтйәновтар, Краснокама районынан - Шәрифуллиндар, Нефтекама ҡалаһынан - Яхузиндар. Күгәрсен районы Мораҡ ауылында зона этабына Сибайҙан, Межгорьенан, Әбйәлил, Баймаҡ, Ейәнсура, Күгәрсен, Учалы районларынан һәм Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районынан һигеҙ ғариза бирелгәйне. Жюри Йәнбәковтар (Сибай), Әбүбәкеровтар (Межгорье) һәм Халиҡовтар (Баймаҡ районы) ғаиләләрен еңеүсе тип билдәләне.

Конкурстың ошо этабынан һуң башҡа зоналарҙа киләһе турға үткән 21 ғаилә иғлан ителә. "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" конкурсы еңеүселәре һәм призерҙары 2021 йылдың 1 мартында "Етегән" байрамы - Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнөндә билдәле була.


Сибайҙан - Йәнбәковтар.

КӨНАУАЗ

# ТЫУҘЫРҒАНБЫҘ ИКӘН,

## йәшәргә лә өйрәтәйек



**"Бәйләнештә" селтәрендә бер йәш ҡатын телефон номерымды һорап, смс яҙҙы. Ул мин йәшәгән ҡалаға яҡын урында көслө халыҡ табибы йәшәгәнен ишеткән дә, уның тураһында белешергә теләй ине. Һөйләшеп киттек.**

Берҙән-бер улы бер нисә тапҡыр асыҡтан-асыҡ йәшәргә теләмәүе хаҡында белдергәндән һуң хафаға ҡалған ул. "Ашымдың да, йоҡомдоң да, эшемдең дә тәмен, йәмен тапмайым хәҙер. Нисек инде? Ун бер йәше саҡ тулған малайҙың тормоштан ваз кисеүен аңламайым..." - ҡатын үкһеп илай ине.

Улының был хәләте ярты йылдан ашыу дауам итә икән. Психологта ла булғандар, дауаханала ла ятҡандар, ҡот та ҡойҙорғандар, бағымсы саҡырып, өйөн дә таҙалағандар. Ҡыҫҡаһы, бар сараларҙы ла ҡулланып ҡарағандар. Тик береһе лә ярҙам итмәгән. Йәшәгеһе килмәүе хаҡында әйтмәһә лә, улы хәҙер йомоҡҡа әйләнгән, бүлмәһенә бикләнә лә, һорауҙарға яуап биреүҙән тыш, береһе менән аралашмай, һөйләшмәй икән. "Бөтәһе лә интернет-уйындан башланды..." ти әсә.

Интернет-уйындарҙың кире эҙемтәһе булыуына ышанам. Был хаҡта киң мәғлүмәт сараларынан планетабыҙҙың йә бер мөйөшөндә, йә икенсеһендә үҫмерҙәр һәм балалар ҡатнашлығында фажиғәләр булыуы тураһында ла ишетелеп тора. Виртуаль донъя геройҙары менән тәүлек әйләнәһенә "һуғышып", компьютер артында ултырып вафат булған, йә дуҫы менән бергә ошондай уйындан һуң класташтарын, уҡытыусыһын үлтереп, яралап, аҙаҡ үҙҙәренә ҡул һалған үҫмерҙәр тураһында ла беләбеҙ. "Хәҙер бөтә балалар ҙа көнө буйы йә телефон, йә компьютер артында ултыра, бөтәһе лә фажиғә алдында торамыни? Был уйындар бала күңеленә бер нисек тә тәьҫир итмәй, ә бөтә бәләнең башы - ата-әсәләрҙең үҙендә", тигән педагог менән бәхәсләшкәнем бар.

Эйе, балаһының ысынбарлыҡтан ҡасып, виртуаль донъяға "китеүен"дә ата-әсәһенең ғәйебе юҡ түгел. Ғөмүмән, һәр баланың фажиғәһендә ололар ғәйепле. Эргә-тирәһендәге кешеләрҙең, яҡындарының үҙен аңламауынан, уратып алған тормошоноң ҡыҙыҡ, сағыу булмауынан ҡаса бит ул үҫмер. Һәр ваҡыт әрләп, тәнҡитләп, кәмһетеп торған кешеләрҙән ҡотолғоһо килеп, үҙе уйлап сығарған донъя геройҙарына ҡаршы һуғыш аса. Уйындарҙың күбеһе шулай ҡоролған: уйынсы күп осраҡта еңә. Шуға ла бала унан "сыҡҡыһы" килмәй, сөнки ул бында еңеүсе, герой! Ата-әсәһе уйынды тыйһа,баланың асыуы килә, еңә алмаһа, тормоштоң ҡыҙығын тапмай башлай. Һәм йә элмәккә үрелә, йә бейек ҡатлы йорт ҡыйығына менә. Үрҙә атап киткән ғаилә менән дә шулай килеп сыҡҡан...

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, балалар уйнаған интернет-уйындарҙың күбеһе һуғышҡа, еңеүгә, еңелеүгә ҡоролған шул. Мәктәптә эшләгән ваҡытта "тере мәйет"-тәр, имәнес хайуандар йәки икенсе планета заттарын балта, бысаҡ менән "баҫтырған" үҫмерҙең күҙҙәрен күреп ҡурҡҡаным, бер уҡыусымдың дәрес әҙерләргә өгөтләгән әсәһенә нисек ҡысҡырғанын да ишеткәнем бар. Шуға күрә лә, "Был ябай уйын, ул балалар психикаһына йоғонто яһамай", тигәндәр менән бәхәсләшергә әҙермен.

Интернет-уйын араһында балалар һәм үҫмерҙәрҙе суицидҡа этәргән тағы ла бер йүнәлеш бар. Әйтергә кәрәк, улар бик күп һәм йыл һайын тиерлек төрө үҙгәреп тора. Былтыр Рәсәй ҡалаларының береһендә бер төрлө уйын уйнап, үҫмерҙәр ата-әсәһен генә түгел, бөтә йәмәғәтселекте хафаға һалды. Унан алда балалар араһында таралған тағы бер нисә интернет-уйын киң ҡолас алып, байтаҡ фажиғәгә сәбәпсе булды. Интернет-уйындарҙан тыш, һуңғы йылдарҙа балалар һәм үҫмерҙәр суициды сәбәптәренә Берҙәм дәүләт имтиханы килеп ҡушылды. Насар билдә алған йәки алыу ихтималлығы булған осраҡта ата-әсәһе йәки үҙе алдындағы яуаплылыҡтан ҡурҡып, һәләкәтле аҙымды һайлаған уҡыусылар беҙҙең республикала ла осраны. Үҫмерҙәрҙең эргә-тирәһендәгеләргә, йорт хайуандарына ҡарата ҡанһыҙ мөнәсәбәттә булыуын да туранан-тура ошондай уйындарға бәйләргә мөмкин.

Интернет-уйындарҙан тыш, был фажиғәне тыуҙырыусы ҡайһы бер киноларҙы ла атарға мөмкин. Уларҙың ҡайһы берҙәрен, ысын мәғәнәһендә, үлтереү, үҙеңә ҡул һалыу, аҡса өсөн нисек аманатҡа алыу, язалау буйынса "оҫталыҡ дәресе" тип ҡарарға мөмкин. Быларҙың барыһы ла шундай сағыу, иҫтә ҡалырлыҡ итеп күрһәтелә. Психик яҡтан нығынмаған үҫмерҙәргә уларҙың кире тәьҫирен әйтеп тә торорға түгел. Байтаҡ йылдар элек уҡығайным. Бер үҫмер криминаль темаға китап уҡып сыҡҡандан һуң үҙенең өләсәһен үлтереп, мунса мейесендә яндыра. "Кеше һөйәге күпме яныр икәнен белгем килде..." - ти ул тикшереүсегә.

Психолог Мәрүәрт Әһлиуллина әйтеүенсә, интернет-уйын - ул баланы ысынбарлыҡтан алып ҡаса, яуапһыҙлыҡ, уңышһыҙлыҡ, яңылышлыҡ, уҡытыусының, ата-әсәнең шелтәһе, тәнҡите булмаған виртуаль донъяға алып бара торған сара. Тап унда ғына бала үҙен көслө, батыр итеп тоя. Шуға ла уның унан сыҡҡыһы, айырылғыһы килмәй.

Әгәр ҙә балағыҙ унда йышыраҡ "китә" икән, тимәк, уға эргә-тирәһендә иғтибар, яратҡан кешеләр, шөғөл етмәй тигәнде аңлата. Шуға күрә күберәк балағыҙ менән һөйләшегеҙ, уның хис-тойғоһо, тәьҫораттары менән ҡыҙыҡһынығыҙ. Ысын тормоштағы күңелле ваҡиғалар тураһында күберәк һөйләгеҙ. Әгәр ҙә уны уратып алған донъя ҡыҙыҡ, эмоциональ яҡтан бай икән, уны виртуаль донъя ҡыҙыҡһындырмаясаҡ.

Психолог билдәләүенсә, был уйындарға ылығыуҙың тағы бер сәбәбе шунда: унда геройға "ғүмер" өҫтәү шартлылығы бар. Тап шуның менән үҫмер үҙенең мәңгелек икәненә ышана, йәғни үлеп терелеүе ҡыйын түгел, тип уйлай. Был фекер уларҙа шул тиклем нығына һәм үҙҙәренә "ҡыйын ваҡытта" үлеп тороп, аҙаҡ терелергә була тип уйлайҙар. Бына ошолар ҙа баланы суицидҡа килтерергә мөмкин.

Күптән түгел Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин да "Эхо Москвы в Уфе" эфирында балалар һәм үҫмерҙәрҙең үҙенә ҡул һалыу проблемаһы элеккесә иң көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып ҡалыуын билдәләне. Былтыр, мәҫәлән, республикала 19 үҫмер үҙен үлтергән. 2019 йыл йыл менән сағыштырғанда 12 осраҡҡа аҙыраҡ, әммә был күренеш бер нисек тә ҡыуандырырлыҡ түгел. Бынан тыш, интернет мәғлүмәттәренән йыл һайын Рәсәйҙә 13-тән 20 йәшкә тиклемгеләрҙең һәр ун икенсеһе үҙенә ҡул һалырға маташыуы билдәле. Әммә рәсми статистикаға тик суицид осраҡтары ғына инә. Бейеклектән ҡолап төшөүҙе, юл транспорты ваҡиғаларын, дарыу препараты менән ағыуланыуҙы суд эксперттары күп осраҡта бәхетһеҙ осраҡҡа тиңләй. Ә бит уларҙың да күпселеге үҙенә ҡул һалыу теләге менән эшләнеүе бик тә мөмкин.

Балалар менән бәйле күңелһеҙ осраҡтар күберәк ял, каникул ваҡытына тура килә. Шуға күрә, ошо осорҙа уларға айырыуса иғтибарлы булырға, уларҙы эшкә, мәшғүллеккә йәлеп итергә кәрәк. Ниндәйҙер яңылыш аҙымы, ҡылығы сәбәпле өйҙән сығып киткәне өсөн уға асыу төшөрөргә түгел, ә проблеманы уртаға һалып аңлашыу мөһим. Бынан тыш, тағы бер ниндәй маҡсатһыҙ йәшәүе лә үҫмерҙәрҙе төрлө экстремаль күренештәргә, ваҡиғаларға ылыҡтыра. Бөтә нәмә әҙер, атай-әсәй нык ҡурсый, башта бер ниндәй уй-хәсрәт юҡ. Берәй проблема килеп сыҡһа, уны өлкәндәр еңел генә хәл итә. Бына шул ваҡытта бала үҙен нисек тә булһа тормошҡа ашырырға теләй башлай. Тап шундай ғаиләләрҙәге балалар насар компанияға еңел эләгә. Балалар менән артыҡ сөсөләнергә ярамаған кеүек, ҡаты ҡыланырға ла ярамай. Уларҙы маҡсат ҡуйырға өйрәтергә, рухландырырға, матур киләсәккә өмөт уятырға кәрәк, ти психолог.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*✓ Үҫмер ҡоронан сығыусыларға социаллəшеүҙең төрлө ысулдары булыуы кәрәк. Мәҫәлән, башҡортса дебаттар үткәреү бик шәп күренеш булғайны. Ул йәмғиәттә башҡорт телен нисек ҡулланып булыуҙы күрһәтә ине.*



**Мин уларҙы күптән беләм тип әйтергә мөмкин, әммә эс серҙәренә инеп, үҙҙәре, ғаиләләре тураһында ҡыҙыҡһынғаным булманы. Матур ата-әсәләрҙең ғаилә традицияларын дауам итеүсе матур ғаилә - артығы кәрәк тә түгел. Әммә өлгө булырҙай ғаиләләрҙе башҡалар ҙа белергә, уларҙың уй-фекерҙәрен ишетергә тейештер, моғайын, тигән фекер әңгәмәләшеү теләген көсәйтте генә. Ғәҙәттә, мәҡәлә яҙырға, әңгәмәләшергә тиһәң, тәү ситтатта, ҡатын-ҡыҙҙы алғы планға ҡуябыҙ. Был осраҡта иһә, башҡорттарға хас булғанса, барлыҡ һорауҙарға иң элек атай яуап бирҙе, әсәй иһә уның фекерҙәренә өҫтәмәләр генә индерҙе. Юҡ, әсәй икенсе планда торғандан түгел, киреһенсә, бер фекерле, бер уйлы булғанлыҡтан, ир-ат, атай абруйын алға ҡуйғанлыҡтан. Шулай итеп, бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ: барығыҙға ла билдәле журналистар - "Шоңҡар" журналы хеҙмәткәре Гөлсинә (Байғужина) менән әлеге ваҡытта БР-ҙың Стратегик тикшеренеүҙәр институтының матбуғат хеҙмәте етәксеһе Ғәзиз ЙОСОПОВтар.**

# БЕР-БЕРЕБЕҘ ӨСӨН

## Яралғанбыҙ ерҙә



**▸ Өфө - миллионлы ҡала, күптәр уның ығы-зығыһында албырғап ҡала, бәғзеләр аҙаша, кемдер юғалтыша. Ә һеҙ, киреһенсә, ошо миллионлаған кеше араһынан бер-берегеҙҙе эҙләп тапҡанһығыҙ. Ғөмүмән, танышыу-табышыу ҡайҙа, нисек башланды, һеҙҙең ғаилә нисек барлыҡҡа килде?**

**Ғәзиз:** Шул уҡ ваҡытта Өфө - бәләкәй ауыл кеүек, тип тә әйтәләр бит. Беҙҙең осрашыу ҡыҙыҡ килеп сыҡты: ул ваҡытта икебеҙ ҙә журналист булып эшләйбеҙ. Әҙәбиәт, сәнғәт, архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге республика премияһының сираттағы лауреаттарын тәбрикләү сараһында мин фотограф булып йөрөнөм, Гөлсинә журналист булараҡ килгән. Хәбәрселәр, ғәҙәттә, фотографтарҙан үҙ баҫмалары өсөн фото һорап ала. Буласаҡ кәләшем минән дә "Шоңҡар" журналына фотолар һалыуымды һораны. Ни яғы менәндер күңелемә оҡшағандыр, саранан ҡайтҡас, әсәйемә: "Бына шундай ҡыҙыҡ ҡына хәл булды, бер журналист ҡыҙ минән фотолар һораны", - тип һөйләнем. Әсәйем дә журналист булғанлыҡтан, ул ҡыҙҙы белә икән. "Шәп ҡыҙыҡай, әгәр кәләш алырға уйлаһаң, күҙ уңында тот", - тип кәңәш итте. Уйлап ҡараһаң, үҙебеҙ осрашҡан һымаҡ, икенсе яҡтан - осраҡлылыҡ кеүек, шул уҡ ваҡытта әсәй ҙә юл күрһәткәндәй.

Ысынлап та, Аллаға шөкөр, Гөлсинә - өлөшөмә төшкән көмөшөм. Һәр бер уңышлы ираттың артында ҡатын тора, тип юҡҡа әйтмәгәндәрҙер. Ятаҡта йәшәгән йылдарҙа мин иртәнге алтыла тороп, сәғәт етелә эшкә китә инем. Кисен 8-9-ҙа, ҡайһы ваҡыт 10-да ла ҡайта торғайным. Һәр саҡ өйҙә барыһы ла яҡшы икәненә күңелем тыныс булды. Мин кәләшемә ышандым, ул - миңә. Ҡайтыуға ашарға әҙер, бала ҡараулы, тыныс, уңайлы. Эйе, ятаҡ тормошонан ҡайһы бер ваҡыт кәләшем илап та ала ине, хәҙер фатирлы ла булдыҡ, машина ла алдыҡ, яйлап донъя йыйыла, иң мөһиме - балалар ҙа үҫә, ғаиләбеҙ бөтөн.

**Гөлсинә:** Ошо тәүге осрашыуҙан һуң күпмелер ваҡыт үткәс, Ғәзиз эш телефоныма тыуған көнөм менән ҡотлап шылтыратты. Шунан ныҡлап аралаша башланыҡ. Һәр ҡыҙ кеүек, мин дә буласаҡ тормош иптәшем ышанысл, аҡыллы булһын тип теләнем һәм, шөкөр, теләгем тормошҡа ашты.

**▸ Йәш саҡта күптәр атай-әсәй һүҙен ҡолаҡҡа бик элеп бармай, тиҙерәк үҙаллы булғыһы, мәсьәләләрҙе үҙенсә хәл иткеһе килә. Шул сәбәпле хатта ҡайһы берҙә атай-әсәй менән фекер айырмалығы ла килеп сыға. "Мин үҙем беләм, һеҙ ҡарттар нимә аңлайһығыҙ!" тигән ҡараш бик йыш хаталаныуға килтерә. Ә бына һин, Ғәзиз, әсәй һүҙенә иғтибар иткәнһең, тимәк, һеҙ үҫкән ғаиләлә атай-әсәй абруйы ҙур булған? Гөлсинә кемде тыңланы икән?**

**Ғәзиз:** Әлбиттә, ололарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалырға кәрәк. Беҙ ғаиләлә өс бала үҫтек. Бигерәк тә беҙҙең ғаиләлә атай айырым ихтирам үҙәгендә, атай абруйы көслө, тиер инем. Атай-әсәйебеҙ беҙҙе тәрбиәләп кенә ҡалманы, тормошта дөрөҫ юл һайларға йүнәлтеп, бөгөнгәсә ярҙамсы, терәк булып тора. Бәләкәй ваҡыттан уларға төрлө һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек, бер ваҡытта ла һорауыбыҙ яуапһыҙ ҡалманы. Атайым һөнәре буйынса табип булғас, биология, химия, физика буйынса барлыҡ һорауҙарға балаға аңлайышлы итеп төшөндөрә торғайны. Шуға мәктәптә лә яҡшы уҡыныҡ. Мин әсәйгә оҡшап, журналист һөнәрен һайлаһам, Зәлифә һеңлем атай кеүек табип. Юлдаш - тарихсы, этнограф, фән кандидаты.

**Гөлсинә:** Мин атай-әсәй ҡосағынан иртә айырылдым - ун йәшемдән Сибай интернат-гимназияһында уҡыным. Шул саҡта тәрбиәсем Ләлә Шәкир ҡыҙы Әминеваның, йәне йәннәттә булһын, "Ҡыҙҙар, эскән кешегә кейәүгә сығып ҡуймағыҙ, ғүмер буйы үкенерһегеҙ", тип әйткәне хәтергә һеңеп ҡалған. Тормош иптәше һайлағанда иң беренсе шуны күҙ уңында тотҡанмындыр. Киләсәктә балаларға һәйбәт атай, уларға өлгө булырҙай кеше осраһын ине, тип теләй торғайным. Хәҙер балалар атай тип өҙөләп тора, унан күп нәмәгә өйрәнә.

**▸ "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән", ти халыҡ мәҡәле, әммә һеҙҙә, киреһенсә, Зәлифә атай юлын һайлаған, ә Ғәзиз - әсәй юлын... Тимәк, тормошта ҡайһы ваҡыт мәҡәлдәр ҙә бер аҙ үҙгәреп китә. Шул уҡ ваҡытта, килен - ҡәйнә тупрағынан тигәнде раҫлап, Гөлсинә - журналист...**

**Ғәзиз:** Әлеге заманда, мәҫәлән, Төркиәлә журналистар - нигеҙҙә ир-ат, ашнаҡсылар - ирҙәр, иҙән йыуыусылар, йәғни бинаны таҙалаусылар - ирҙәр. Беҙҙә, киреһенсә, хатта ир-ат ҡына башҡарырға тейешле кеүек күренгән эштәрҙе лә ҡатын-ҡыҙҙар эшләй. Был һүҙ ыңғайы ғына, ә һорауға килгәндә, күп нәмә, ысынлап та, ата-әсәнән тора. Әгәр ғаиләлә ата-әсә өлгө булһа, балалар уларҙан күреп үҫә. Быны һөнәр һайлауҙа ғына түгел, тормоштоң барлыҡ өлкәләрендә лә күрергә мөмкин. Мәҫәлән, бөгөн балаларҙы нисек итеп башҡорт теленә ылыҡтырыу тураһында баш ватабыҙ, уны ҙур проблемаға әйләндерәбеҙ. Мин беренсе синыфта уҡығанда русса ауырыраҡ һөйләшә торғайным. Уҡытыусылар атайымды мәктәпкә саҡырып: "Ғәзиз аҡыллы малай, һеҙ, моғайын, өйҙә үҙ телегеҙҙә һөйләшәһегеҙҙер, зинһар, баланың киләсәген уйлағыҙ, өйҙә русса һөйләшегеҙ әле", - тип ҡайтарғандар. Ошо һөйләшеүҙән һуң атайым ҡайтты ла: "Өйҙә башҡорт теленән башҡа бер тел дә ҡулланылмай", - тигән талап ҡуйҙы. Йәғни, өйҙә беҙ тик башҡортса ғына аралашырға тейеш инек. Атайым үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәгендә ҡатнашҡас, унан ҡурайҙа уйнарға ла, башҡорт көйҙәренә, шиғырҙарына, әҙәбиәтенә һөйөүҙе лә һеңдереп үҫтек.

**Гөлсинә:** Эйе, ололарҙы тыңламаған оролған да бәрелгән, тиҙәр бит. Мине атайым бер ҡасан да әрләмәне, әммә уның бер ҡарашы, өйҙә булыуы ғына ла етә. Әсәйем алдан һиҙемләүе, кәңәштәре менән юл күрһәтеп ебәрә. Биш баланы үҫтереп, үҙаллы тормош юлына сығарҙылар. Ике һылыуым, ике ҡустым бар. Һәр береһендә тиерлек өсәр бала, матур итеп донъя көтәләр. Бала күп нәмәне ата-әсәһенән күрә. Һис юғы, уларҙың һөнәре менән таныш була һәм үҙе өсөн һайларғамы-юҡмы икәнлеген хәл итә ала. Ә миңә журналист һөнәренә килергә әҙәбиәт ярҙам итте. Әсәйем уҡырға яратҡанлыҡтан, өйөбөҙҙә китаптар күп булды, гәзит-журналдарҙы ла барыһын да тиерлек алдырҙыҡ. Өсөнсө класта уҡ Зәйнәб Биишеваның "Яҡтыға" трилогияһын йотлоғоп уҡып сыҡтым. Шул саҡта "Их, Емешкә берәй нисек итеп ошо китап аша икмәк бирергә ине", тип хыялланғанымды хәтерләйем. Сибайға уҡырға килгәс, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһым, әлеге ваҡытта яҙыусы Лира Яҡшыбаева иншаларҙы матур яҙғанымды һиҙеп ҡалып, кәңәштәрен биреп, уларҙы мәҡәлә итеп үҙгәрттереп, "Йәншишмә" гәзитенә ебәрә торғайны.

**▸ Ә бына үҙегеҙгә ата-әсәнән күскән телгә, мәҙәниәткә, әҙәбиәткә ҡарата һөйөүҙе балаларығыҙға нисек тапшыраһығыҙ? Үҙ заманығыҙ менән сағыштырғанда, бөгөнгө балаларға башҡорт мөхите етәме?**

**Ғәзиз:** Әлбиттә, етә. Әйтеп китеүемсә, бала өсөн ата-әсә өлгө булып торорға тейеш. Мин үҙем ҡурайҙа уйнағас, миңә эйәреп Рамаҙан улым да уйнай башланы. Әгәр теләк булһа, бөтөн нәмәне эшләп, юҡтан да бар яһап була. Иң мөһиме, теләк, дәрт булһын.

Әле көнүҙәк проблемаларҙың береһе - үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәттең булмауы. 13-14 йәшлек үҫмерҙәр өсөн башҡортса әҙәбиәт юҡ. Ни өсөн балалар Гарри Поттер тураһында йығылып ятып уҡый? Сөнки унда улар тураһында, йәғни уларҙың йәштәштәре тураһында яҙылған. Үҫмерҙәр өсөн Әнүәр Бикчәнтәевтың китаптарынан башҡа китап юҡ, тигәнде ишеткәнем бар. Бында бер ни тиклем хаҡлыҡ бар. Әммә улар үткән быуат, ә бөгөнгө үҫмерҙәр өсөн яңы әҙәбиәт юҡ. Икенсе яҡтан, үҫмер ҡоронан сығыусыларға социаллəшеүҙең төрлө ысулдары булыуы кәрәк. Мәҫәлән, башҡортса дебаттар. Башҡорт телендә парламент дебаттары үткәреү бик шәп күренеш булғайны. Ул көнкүрештә генә түгел, ә йәмғиәттә башҡорт телен нисек ҡулланып булыуҙы ла күрһәтә ине. Мәктәптәге дәрестәрҙән айырмалы рәүештә, унда тел ысынлап та ғәмәлдә ҡулланыла - бер яҡтан, дәлилдәр табып, уларҙы билдәле бер сылбырға теҙеп, фекеренде еткерергә тейешһең, икенсе яҡтан, телмәреңә лә иғтибар итергә кәрәк.

**Гөлсинә:** Мөхит етерлек, әммә телгә һөйөү барыбер тәү ситтатта ғаиләлә һалына. Тәүге сабыйыбыҙ тыуғас уҡ ҡәйнәм, балаң менән һөйләш, тигәйне. Мәлендә генә әйтелгән бик урынлы кәңәш булған. Өсөһөнөң дә теле башҡортса һәм иртә асылды, әле ике йәш тә ике айлыҡ кинйәкәйебеҙ ҙә ике-өс һүҙ ҡушып "хәбәр һата".

Бәпес тыуғас та, нимә эшләһәң дә, уға башҡортса һөйләргә кәрәк. Холоҡтоң төп һыҙаттары өс йәшкә тиклем формалашҡан кеүек, милли рух та ошо ваҡытта уҡ ныҡлы һалынып ҡуя тип уйлайым. Артабан һөйләшкәндә русса ҡыҫтырып ебәрһә лә, бөтөнләй икенсе мөхиттә йәшәргә, белем алырға тура килһә лә, күңелендәге рухы һүнмәй ул. Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай... Тәүге өс йыл хәл иткес роль уйнай. Өйҙә башҡортса һөйләшеү, көн дә йоҡлар алдынан башҡортса әкиәттәр уҡыу ҙа мөһим. Русса әкиәт булһа, шунда уҡ тәржемә итеп тә, үҙем уйлап сығарып та һөйләйем.

**▸ Беҙ, ысынлап та, балаларға үҙебеҙ нимәне уҡығанбыҙ, нисек тәрбиәләнгәнбеҙ, нимәне беләбеҙ - шуны бирергә, шуны һеңдерергә, шуны аңлатырға тырышабыҙ. Ә бөгөнгө балалар бөтөнләй икенсе, беҙ, киреһенсә, донъяға улар күҙлегенән ҡарарға, уларҙың кимәлендә фекерләргә, уларҙың кимәлендә уйларға тейешбеҙ. Өс баланың ата-әсәһе булараҡ, бөгөнгөбөҙҙө нисек баһалайһығыҙ - балалар артынан өлгөрөп буламы, әллә беҙ уларҙан күпкә артта ҡалғанбыҙмы?**

**Ғәзиз:** Быны фекерләү инерцияһы менән аңлатып була. Йәғни беҙ донъяны элекке кеүек тип уйлайбыҙ, ысынбарлыҡта ул шул тиклем ныҡ үҙгәргән. Цифрлы

✓ *Аллаға шөкөр, әлеге ваҡытта ғаилә психологияһы үҫешкән, араларҙы көйләп ебәреү өсөн ысулдар бик күп. Шулай уҡ халҡыбыҙҙың да төрлө ғөрөф-ғәҙәттәре бар, улар барыһы ла сабыр итергә саҡыра.*



технологиялар, глобалләштереү, илдәр, мәҙәниәттәр араһында аныҡ сиктәрҙең, тыйыуҙарҙың булмауы, мәҙәни-ара диалогтың үҫешеүе күҙлегенән ҡарарға өйрәнергә кәрәк. Был осраҡта күпселекте тәшкил иткән халыҡ алға сыға. Шул мөхиттә үҙ телен һаҡларға теләгән, телен яратырға өйрәнгән балаға төрлө ысулдар, ҡоралдар кәрәк. Уларҙың береһен башҡорт телендәге парламент дебаттары тип әйтеп киттем инде.

**Гөлсинә:** Үҙемден үҫмер ҡыҙым миҫалында ғына фекер йөрөткәндә лә, был йәштә ҡыҙыҡлы, фәһемле фантастика, детектив, фәнгә таянып яҙылған әҫәрҙәр кәрәк. Беҙ икенсерәк, күбебеҙ ауылда үҫкән, интернетһыҙ үҫмерҙәр инек. Хәҙергеләр, айырыуса ҡала үҫмерҙәре, бөтөнләй башҡаса. Ер менән күк. Уларҙың ҡыҙыҡһыныуҙары артынан ҡыуып етеүе лә ауыр. Улар аҡыллы ла. Күптәр үҫмер күнеленә юлды күнел асыу аша, блогер, поп-йондоҙҙар, инстаграм, тик-ток яҙҙамында һалып була, тип уйлай икән яңылыша, минеңсә. Бөгөнгө үҫмер - хоҡуҡтарын белгән, үҙенең нимә теләгәнен яҡшы аңлаған алдынғы ҡарашлы кеше ул.

**▸ Ғаилә - ике ерҙә ике төрлө тәрбиә алып үҫкән ике төрлө характерҙағы кешеләрҙең бер ячейкаға берләшеүе.**

**Гөлсинә:** Ризаһыҙлыҡ килеп тыумаһын өсөн иргә лә, ҡатынға ла үҙ өҫтөндә эшләү кәрәк. Мөнәсәбәттәрҙә бер-береңә нимә теләгәнеңде, нимә оҡшамағанын әйтеп барыу яҡшы. Әммә упкәләп, гәйепләп, әрләп түгел. Эстән генә ниҙер көтөп, өмөтөн аҡланмауына ризаһыҙлыҡ белдереп, ҡәнәғәт булмай йөрөһәң, аралар һалҡыная, упкәләр ауырыуға һабыштыра.

**Ғәзиз:** Әлбиттә, ундай саҡтар ҙа була. Аллаға шөкөр, әлеге ваҡытта ғаилә психологияһы үҫешкән, араларҙы көйләп ебәреү өсөн ысулдар бик күп. Шулай уҡ халҡыбыҙҙың да төрлө ғөрөф-ғәҙәттәре бар, улар барыһы ла сабыр итергә саҡыра. Әммә төрлө хәл-торош булыуы ихтимал, шуға ситуацияға ҡарап хәл итәһең инде. Шулай ҙа барлыҡ осраҡтарҙа ла борондан килгән иң шәп ысул: шымырға!

**▸ Билдәле бер спортсы үҙе иҫән ваҡытта бер интервьюһында: "Барлыҡ уңышлы, бәхетле ғаиләләрҙә ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙың үксәһе аҫтында (подкаблучник)", - тигәйне. Был фекер менән килешәһегеҙме?**

**Ғәзиз:** Ҡатын-ҡыҙҙың үксәһе аҫтында булырға ла кәрәкмәй, шул уҡ ваҡытта ғаиләлә һин хужа ла, батша ла түгелһең. Ғаилә, минеңсә, ул ике менән. **Бер ҡараһаң, велосипедта йөрөйҙәр, икенсеһендә йога менән шөғөлләнәләр. Был ваҡытта Гөлсинә менән Сафия нимә эшләй һуң, уларҙың спорт менән шөғөлләнергә ваҡыты ҡаламы?**

**Гөлсинә:** Теләк булһа, өлгөрәһең тиҙәр бит. Спорт менән шөғөлләнеү генә түгел, психолог һөнәренә уҡып та йөрөйөм. Хәҙер күптәргә психологик ярҙам кәрәк, шуны ла уйланым. Электән миңә эс серҙәрен түгә, кәнәш һорай торғайнылар. Шул саҡта үҙемсә кәңәш биргән булам. Бер кемгә лә әйтмә, тип һөйләүселәр һаман да бар. Уларҙың серҙәре миндә бата. "Ярҙам һораған кешеләргә профессиональ кәңәш бирһәң, шәп тә инде", тигән уй килде лә ныҡлап өйрәнергә, уҡырға булдым. Был белем журналистика өлкәһендә лә ҡамасауламаҫ.

Ә йогаға ҡыҙыҡһыныу Ғәзиз аша килде. Ул инде ун йыл йога менән дуҫ. Был шөғөл үҙемә иғтибар биреү сараһы ла. Көнөнә бер нисә минут ҡына булһа ла үҙең өсөн ваҡыт бүлһәң, йәшәүе күпкә еңел. Шуға, ваҡытымды тик бала ҡарауға, донъя көтөүгә генә бүләм, тип әйтә алмайым. Әлбиттә, күп балалы әсәй, ир ҡатыны булыу күп көстө һәм ваҡытты ала. Әммә Ғәзиздең һәр яҡлап тая-

# ЯРАЛҒАНБЫҘ,

## һөйөү булып...

**Бер уйлы, бер юллы булыу өсөн ғаиләгә нимә кәрәк?**

**Гөлсинә:** Бер-береңә "Ул минең балаларымдың ҡәҙерле кешеһе бит әле", тип ҡарау кәрәк. Балалар беҙ икәүгә күҙ төбәп тора. Улар өсөн яуаплылыҡ алғанбыҙ.

**Ғәзиз:** Тәү сиратта, ғаиләнең әһәмиәтен аңларға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр, өйләнеп ҡарайым да, килеп сыҡмаһа, айырылышырбыҙ, тип уйлай. Ә ғаилә ҡорор алдынан кем балаһы, кем менән яҙмышыңды бәйләйәсәкһең, кем буласаҡ балаларыңдың әсәһе йәки атаһы тип ҡарарға кәрәк. Башҡа ғаиләләрҙә нисектер, беҙҙә атай-әсәй бала саҡтан шулай тәрбиәләнә. Йәғни был тәрбиә кем менән дуҫ булырға кәрәклекте аңлауҙан башланып, кем менән аралашырға, кем менән ғаилә ҡорорға, тигән мәсьәләне лә үҙ эсенә ала. Юҡҡа ғына, кем арбаһына ултырһаң - шуның йырын йырлайһың, тимәйҙәр бит. Ә инде "үлеп ғашиҡ булдым, уныһыҙ бер минут йәшәй алмайым" тип түгел. Ундай ғаиләләр, күп осраҡта, тәүге хистәр - эйфория үтеү менән көрсөккә терәлә.

Әле беҙҙең ғаилә ҡорғанға 14 йыл, йылдар һаны арткан һайын мин ҡатынымды тағы ла нығыраҡ яратҡанымды аңлайым. Моғайын, тағы ла 10-15-20 йылдан һуң, артҡа боролоп ҡарап, "Эээх, 45 йәшемдә, моғайын, хәләлемде әлеге ҡәҙәре яратмағанмындыр", тип әйтермен.

**▸ Амин, шулай булһын. Шулай ҙа тормошта барыһы ла ал да гөл генә бармайҙыр инде, барыбер бәхәстәр ҙә, хатта шул уҡ бала тәрбиәләү мәсьәләһендә лә, килеп тыуа, һауыт-һаба ла шылтырап алалыр. Шундай мәлдәрҙә нисек йырып сығаһығыҙ?**

шәхес, ике кешенең диалог ҡора белеүе. Икенсе яҡтан, Бәйғәмбәребеҙ ҙә беҙгә өлгө, ул 60 йәшенә тиклем хәҙрәти Хәтиҗә менән татыу йәшәй. Ябраил фәрештә тәү тапҡыр килгәндә лә иң элек кәңәшләшкән кешеһе ҡатыны була. Шуға, әлбиттә, бер-береңә менән кәңәшләшергә кәрәк.

**Гөлсинә:** Хәҙер ҡатынын, ғаиләһен кәм-хур итмәгән, улар өсөн таш диуар кеүек ҡалҡан булып торған ир-ат күп. Уларҙы мин ҡатындарының үксәһе аҫтында йәшәгән ирҙәр тип әйтергә телем әйләнмәй. Киреһенсә, ғаилә ҡиммәттәрен беренсе урынға ҡуйыусы ир-ат һоҡланыу ғына уята.

**▸ Ғаиләгеҙҙә өс бала үҫә: ике ҡыҙ, бер малай. Уларға матур башҡорт исемдәре ҡушҡанһығыҙ. Исем һайлағанда ла килешеп һайланығыҙмы, әллә бүлешеп алып, ҡыҙҙарға - атай, малайға - әсәй, йәки, киреһенсә, тәҡдим иттеме?**

**Ғәзиз:** Исем һайлағанда ғына түгел, бөтөн эштәрҙе башҡарғанда ла иң мөһиме - ниәт. Һайлаған ишем менән оҙон ғүмер бергә йәшәйәсәкбеҙ, балаларыбыҙҙың да исемдәре матур булһын, исемдәре есемдәренә тап килһен, тип ҡарағанда, барыһы ла тәбиғи килеп сыға. Диләфрүз - шат, шатлыҡ таратыусы, йәғни беҙгә тәүге бала шатлығын килтереүсе. Һүрәт төшөрөү менән мауыға, художество мәктәбенә йөрөй һәм минең кеүек йөҙөүсе. Рамаҙан - рамаҙан айы башланғанда донъяға килде, ушу, робототехника менән шөғөлләнә. Икеһе лә Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында уҡый. Бәләкәсебеҙ Сафия - сафлыҡҡа эйә, сафлыҡҡа тулы сабый булып инде өйөбөҙгә. Йәғни уларға исемдәр үҙенән-үҙе табылды, хатта үҙебеҙ ҙә аптырайбыҙ. Һәр бала үҙ ризыҡы менән тыуа тигән кеүек, һәр балабыҙ үҙ исеме менән тыуҙы.

**▸ Социаль селтәрҙәрҙәге тарихты ҡараһаң, Ғәзиз йә улы, йә ҡыҙы** ныс булыуы, ҡыҙыҡһыныуҙарыма ҡаршы төшмәүе миңә донъя мәшәҡәтенә, балаға ғына батмаҫҡа ярҙам итә.

**▸ Ҡайны-ҡәйнә менән мөнәсәбәттәрегеҙ нисек? Ҡайһы бер килен-кейәүҙәр икенсе яртыһының ата-әсәһе менән матур мөнәсәбәт ҡора алмауы ла сер түгел бөгөн.**

**Ғәзиз:** Аллаға шөкөр, ҡайным менән ҡәйнәм Хәйбулла районының Аҡназар ауылына беренсе тапҡыр танышырға барғанымда уҡ оҡшанылар. Биш балаға ғүмер биргәндәр, Гөлсинә - тәүге балалары. Эшсәндәр, етмеш төрлө һөнәргә эйә улар, балаларын да үҙҙәре өлгөһөндә тәрбиәләгәндәр.

**Гөлсинә:** Ҡәйнәм тәү күреүҙән күңелемә ятты. Ҡайным менән матур, татыу йәшәйҙәр. Ейәндәрен ныҡ яраталар, уларға ҡайтырға булһаҡ, балалар талпынышып торалар, һағыналар. Улар эргәһендә беҙгә лә нисектер тыныс, рәхәт. Уларҙа саҡта бар донъя мәшәҡәттәре онотолоп ҡалған кеүек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәхет төшөнсәһенә һәр кем үҙенсә мәғәнә һала, һәр кем үҙенсә аңлай. Минеңсә, бәхетле ғаиләләрҙең үҙенең һәр саҡ балҡып торған ҡояшы була, балаларҙың йөҙөнән йылмайыу китмәй, күҙҙәре көлөп, дәрттәре ташып, ыңғай энергиялары башҡаларҙы ла илһамландырып тора. Ә быныһ сығанағы, әлбиттә, бәхетле ояҡ ҡора алған, бер-береһен ихтирам иткән, мөхәббәтле атай-әсәйҙәр. Түбәндәге юлдар ҙа, әйтерһең дә, тап улар өсөн ижад ителгән:**

**Бер-беребеҙ өсөн яралғанбыҙ,**
**Яралғанбыҙ ерҙә һөйөү булып...**
**Һинең барлығыңды тойоуҙан да**
**Йөрәккәйем балҡый ҡояш булып.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА**
**әңгәмәләште.**

---

*ҠЫҘЫҠ ТҮГЕЛ, ӘММӘ...*



## ЕТЕМ БАЛАЛАР КҮПМЕ?

**2019 йылда Башҡортостанда 681 балаға ҡарата 523 ата-әсә үҙ хоҡуғынан мәхрүм ителде: 288 кеше - үҙ бурысын үтәмәгәне, шул иҫәптән алимент түләүҙән баш тартҡаны, 112-һе - ата-әсә хоҡуғын самаһыҙ ҡулланғаны, 61-е хроник эскесе һәм наркоман булғаны, 30-ы - бер ниндәй сәбәпһеҙ үҙенең балаһын бала табыу йортонан, башҡа дауалау, тәрбиәләү учреждениеларынан, халыҡты социаль яҡлау кеүек башҡа ошоға оҡшаш ойошмаларҙан алырға теләмәгәне, 8-е - балаға ҡарата ҡаты мөғәмәләлә булғаны, физик һәм психик көс ҡулланғаны өсөн. Республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан шулай тип хәбәр иттеләр.**

Башҡортостанда әле 12144 етем бала иҫәпләнә. Шуның менән ашыуы (1064) республика интернаттарында йәшәй. 11080 бала ғаиләләрҙә тәрбиәләнә. Былтыр ата-әсә ҡарауынан мәхрүм һәм етем ҡалған 812 бала асыҡланған. Ауырғазы, Балтас, Бәләбәй, Дүртөйлө, Ишембай, Ҡариҙел, Мәләүез, Нуриман, Тәтешле райондарында, Сибай, Стәрлетамаҡ ҡалаларында был йәһәттән үҫеш күҙәтелә.

Төбәктең ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Ивановна Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә балаларҙы урынлаштырыуҙа ҡайһы бер проблемалар барлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Беренсенән, уллыҡҡа алырға теләүселәрҙең бөтәһе лә тиерлек уны сабый сағынан уҡ тәрбиәләргә теләй. Ә етем балаларҙың яртыһынан күбеһе - 14 йәштән өлкән. Инвалид баланы тәрбиәгә алырға баҙнат итеүселәр ҙә күп түгел. Балалар йорттарындағы үҫмерҙәрҙең 34 процентының һаулыҡ мөмкинлеге сикле. Бынан тыш, 40 процентының бер туған апаһы йәки ағаһы бар. Был да бер ни тиклем ҡаршылыҡ тыуҙыра, сөнки закон буйынса уллыҡҡа алғанда уларҙы айырырға ярамай.

Министр тәрбиәгә алған ғаиләләргә ярҙам маҡсатында 2011 йылдан республикала Әсәлек капиталы күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү ҡаралғанлығын иҫкә төшөрҙө. Инвалид бала алғанда был сумма 100 мең һумға арта. Ошо осорҙа уны 1583 балаға алдылар, шуның 106-һы инвалид бала. Был аҡсаға ғаиләләр башлыса торлаҡ шартын яҡшырта, шулай уҡ уҡыуға, дауалауға тотона. Түләү индерелгәндән һуң инвалид баланы тәрбиәгә алыусылар һаны 19 процентҡа артҡан.

## НИКАХТАМЫ?

**Башҡортостанда былтырғы йылдың 10 айында 17 мең никах һәм 12 мең айырылышыу осрағы теркәлгән.**

"Рәсәйҙең иң күп милләтле төбәктәренең береһе булараҡ, Башҡортостанда никахтарҙың күбеһе төрлө милләт вәкилдәре араһында төҙелә. Әммә был һәр ваҡыт шулай булманы. Мәҫәлән, 1925 йылда этник-ара никахтар дөйөм ғаилә ҡороусылар һанының 4 процентын ғына тәшкил иткән. 1970 йылда - яҡынса 29 процент. Һуңғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса шәхси йорт хужалыҡтарының 27 проценты ғаилә ағзаларының төрлө милләтҡә ҡарауын күрһәткән", - тип билдәләй Башҡортостан статистикаһы.

Республикала һуңғы 20-30 йылда никах һәм айырылышыуҙар нисбәте үҙгәргән. 1980 йылда төбәктә һәр 10 ғаиләгә ике айырылышыу тура килһә, 1990 йылда - өс, 2019 йылда - алты.

Айырылышҡандан йәки тол ҡалғандан һуң өйләнешкәндәр ҙә бихисап. 2019 йылда 6835 ир-егет (дөйөм никахлашыусыларҙың 27 проценты) икенсегә өйләнгән, 7673 ҡатын-ҡыҙ (31 процент тиреһе) ҡабаттан кейәүгә сыҡҡан.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАЙРАМДАРҘЫ...

## ғаилә йолаһына әүерелдерәйек!

**Байрамдарыбыҙ бик күп беҙҙең, шөкөр. Әле генә шаулап-гөрләп Яңы йылды ҡаршы алдыҡ. Тиҙҙән 23 февраль, 8 март, 1 май, Бөйөк Еңеү көнө... Календарҙа йәнә рәсми һәм рәсми булмаған, ҡыҙыл төҫ менән билдәләнгән һәм билдәләнмәгән бихисап даталар бар. Баҡсасылар, бейеүселәр, тегенселәр, медицина, полиция хеҙмәткәрҙәре көнө һымаҡ һөнәри һәм шулай уҡ дини байрамдар ҙа күп. Халыҡ-ара, бөтә донъя, Рәсәй һәм фәҡәт республика халҡына ғына хас иҫтәлекле көндәр ҙә байтаҡ ҡына беҙҙең. Уларға йәнә үҙенең һәм яҡындарыңдың тыуған көндәре лә ҡушылһа, көн дә байрам, көн дә туй, тигән кеүек килеп сыға инде.**

Эйе, байрамдарыбыҙ күп һәм улар бик кәрәк. Кешенең ял итеү, күңел асыу, аралашыу, осрашыу мөмкинлеге булырға тейеш. Демокрит әйтмешләй, байрамһыҙ тормош тукталышһыҙ, ялһыҙ оҙон юл кеүек бит. Минә ҡалһа, байрамға ҡарағанда уға әҙерлек ваҡыты айырыуса күңелле. Бүләк һайлау, күстәнәс алыу, табын әҙерләү, ҡунаҡ саҡырыу, ошо ваҡиға айҡанлы өйөңдә берәй нәмәне яңыртыу, йә һис юғында кеше килеүгә яңы таҫтамалдар булһа ла элеп ҡуйыу, өҫтәлендәге эскәтерҙе алмаштырыу бер кинәнес бирә. Психологтар әйтеүенсә, был күңелле генә түгел, ә файҙалы ла мәшәҡәт икән. Ана шул бүләк һайлағанда, аш-һыу хәстәрләгәндә, барыһы ла йыйылған ваҡытта үткәрелә торған уйындарҙы иҫкә төшөргәндә, ҡотлау һәм рәхмәт һүҙҙәре әҙерләгәндә ҡунаҡҡа саҡырылған кешеләрҙең яҡшы яҡтарын ғына хәтерләү, уларға нимә кәрәк, нимәгә лайыҡ икәнен аңларға тырышыу кешеләрҙе бер-береһенә яҡынайта, араларын йылыта, уларға ихтирам тойғоһо арта.

Байрамдарға ҡарата һәр кемдең үҙ ҡарашы, әлбиттә. Туй тантаналарына, тыуған көндәргә юҡҡа аҡса сарыф итеү йәки ваҡыт үткәреү тип кенә ҡарағандар ҙа бар. Ялҡытҡыс тип тапҡандар ҙа бар хатта уларҙы. "Байрам итеү" тигәндә мотлаҡ иҫерткес эсемлек эсеп ултырыу тип аңларға ярамай. "Мин хәҙер эсмәйем бит", тип, тыуған көндәргә, туйға, юбилейға барыуҙан баш тартҡандарҙың ҡылығы менән бер нисек тә килешеп бөтөп булмай. Береһе лә быңдай күркәм тантаналарға эсер йәки ашар өсөн бармай бит. Шөкөр, элекке кеүек, аҙыҡ-түлеккә ҡытлыҡ юҡ, һәр кем үҙе теләгән деликатесты ла, экзотик блюдоларҙы әҙерләү, һатып алыу мөмкинлегенә эйә хәҙер. Дөрөҫ, динебеҙ өҫтәлдә алкоголле эсемлек булған табынға йөрөмәҫкә ҡуша. Шулай ҙа юбилярға йәки яңы өйләнешкән йәштәргә, уларҙың ата-әсәһенә булған ихтирам йөҙөнән уларҙы ғүмерҙәренең матур ваҡиғаһы менән тәбрикләргә, бүләген тапшырырға бер кем дә тыймай. Унан һуң, хәҙер күптәр табынына шарап ҡуймай. Йолаһы шул бит инде, тип, табынға ҡуйылған хәлдә лә ауыҙ итмәгәндәр күберәк хәҙер. Халыҡтың шулай йәйләп ҡына айыҡ тормошҡа күсеүе бик тә ҡыуаныслы. Ысынлап та, эсмәйенсә лә бына тигән итеп күңел асырға мөмкин булыуына күптән ышандыҡ бит инде.

Йыш ҡына элекке күршемдең байрамға ҡағылышлы әйткән ошо һүҙҙәре иҫкә төшә: "Балаларыбыҙ ғаилә усағын һағынып ҡайтып йөрөһөн тиһәгеҙ, ни тиклем мәшәҡәтле осор кисерһәгеҙ ҙә, бала саҡта уларҙың тыуған көндәрен үткәрегеҙ, бәләкәй генә булһа ла тантаналар ойоштороғоҙ. Шул саҡта ғына улар, ниндәй генә йәштә булмаһын, тыуған йортон, ҡартайған ата-әсәһен һағынып ҡайтасаҡ. Олоғайған көндәрендә лә бала сағы үткән атай нигеҙе тураһында йылы хәтирәләр уларҙың күңелен йылытып, һәр ваҡыт тартып торасаҡ. Иң сағыу, матур ваҡиғалар тураһында иҫтәлектәр иһә уларға сәләмәт булырға, тормошта ышаныслы аҙым менән атларға ярҙам итәсәк. Ҡунаҡтан уларҙың тағы килгеһе килеп ҡайтырға тейеш. Бына шуның өсөн кәрәк ул ғаилә байрамдары..."

Дини кеше ине ул. Үҙенсә шәриғәт ҡанундарын үтәп йәшәне. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бер ҡасан да, бер кемде лә байрам итеүҙән тыйманы. Балаларының тыуған көнөн дә, Яңы йылды ла бөтә туғандарын, күрше-тирәһен йыйып, матур итеп әҙерләнеп, бүләктәрен алып, күңелле итеп үткәрә ине. Эсеп, боҙолошоп, һуғышып йөрөгән бер кеме лә булманы. Киреһенсә, татыулыҡтары менән айырылды улар, байрамда ғына түгел, эштә лә берҙәм булдылар. Дәррәү йыйылып, атай-әсәһенең бөтә эшен бөтөрөп китерҙәр ине.

Элек-электән байрамдарҙың әһәмиәтен, уның ни өсөн кәрәклеген бик яҡшы белгәндәр. Шуға ла уға ҙур иғтибар биргәндәр. Тап ошондай күңел асыу сараларында ғына һәр кем дәрәжәһенә, йәмғиәттә тотҡан урынына ҡарамай, үҙен тиң итеп тоя ала, сөнки һәр кемгә үҙенең нимәгә маһир булыуын күрһәтергә мөмкинлек тыуа. Мәҫәлән, кемдер йыр-бейеү һәләте, икенсеһе бешереүе оҫталығы, өсөнсөһө шуҡлығы, шаянлығы менән айырыла. Тап ошо үҙенде барыһы менән дә бер тигеҙ итеп тойоу кешегә байрам тойғоһо бирә һәм күңелде күтәрә лә инде...

Эйе, байрамдар кәрәк! Кеше үҙенең шатлығы, ыңғай кисерештәре менән бүлешеү, аралашыу өсөн улар бөгөн бик тә мөһим. Үрҙә әйтеп китеүемсә, байрам итеүҙе совет заманындағы кеүек эскелек сараһы тип ҡарарға кәрәкмәй. Уларҙы халҡыбыҙ йолаларына нигеҙләнеп, өләсәй-олатайҙарыбыҙ аҡылына таянып, бөгөн дә бына тигән ойошторорға мөмкин.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

**Башҡорт ғаиләһендә туғандарҙың үҙ-ара мөнәсәбәт мәсьәләһенә айырым иғтибар бүленгән. Сөнки, билдәле булыуынса, башҡорттарҙың йәшәү рәүеше, шөғөлө үҙ-ара мөнәсәбәттең, бигерәк тә туғанлыҡтың ныҡ булыуын талап иткән. Әйтәйек, тирмә ҡорғанда, тула, кейеҙ баҫҡанда, тире эшкәрткәндә генә лә нисәмә-нисә ҡул көсө кәрәк була. Ә иң ышаныслы терәк - ул туғанлыҡ. Шуға ла башҡорттарҙа туғанлыҡ тойғоһо юғары торған: шәжәрәләр төҙөлгән, ҡунаҡҡа саҡырышҡандар, туй мәжлестәре үткәргәндәр, оҙаҡ-оҙаҡ итеп ҡоҙа һыйлағандар, ҙур-ҙур ғаилә булып бергә йәшәгәндәр. Туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен аңлатыу, һаҡлау, нығытыу маҡсатында бихисап атамалар уйлап табылған һәм бала бәләкәйҙән үк үҙ-ара фәҡәт ошо атамаларҙы ҡушып өндәшергә тейеш булған. Һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим ителгән мәҡәләләр теҙмәһендә туғанлыҡ тойғоһоноң бала күңеленә ниндәй юлдар менән һеңдерелеүе, нисек тәрбиәләүҙәре хаҡында барасаҡ.**

# АТАЙҘАН - ҠОТ, ӘСӘЙҘӘН - ҺӨТ

## Башҡорт халҡының тәрбиә ҡанундарынан



### Атай абруйы

Иң элек Атай абруйы хаҡында һүҙ. Сөнки халҡыбыҙҙа, "Урал батыр" эпосында әйтелгәнсә, төп ҡот атайҙан килә:

*Атаң һиңә ҡот биргән,*
*Әсәң һиңә һөт биргән...*

Башҡорт ғаиләһендә атай абруйы ифрат ҙур булған. Шәжәрә атай нәҫеле буйынса төҙөлгән, иң һуңғы ҡарар, мәсьәләне хәл итеү - фәҡәт атай һүҙенән торған. Атай абруйы көслө булған ерҙә эске тәртип була. Эске тәртип, күңел аҙабе - ғаиләлә лә, йәмғиәттә лә төп таяныс.

"Мәргән менән Маянһылыу" ҡобайырында Маянһылыу үҙендә илен дошмандан ҡурсаларлыҡ көс тойһа ла, атаһы рөхсәтенән тыш ҡулына ҡорал алмай.

*Ярар, ҡыҙым, мен атҡа,*
*Ҡул ҡаушырып тормағыҙ.*
*Аяҡҡа баҫҡан ир-ҡатын, -*
*Бары атҡа менегеҙ,*
*Рөхсәт алғас, атанан,*
*Маян шунда ат менгән,*
*Мәргәнде эҙләп табып,*
*Батырҙар менән бергә*
*Яуға бараһын әйткән.*

Халыҡ ижадынан ошондай тәрбиә ҡанунына бик күп миҫалдар килтерә алабыҙ. Ижадыбыҙ менән ҡыҙыҡһыныу, унан фәһем алып өйрәнеү генә кәрәк. Әммә һәр замандың үҙ яҡшыһы, үҙ яманы. Яманаты сыҡҡан, өйҙә бола ҡуптарған, бер кемде лә һанға һуҡмай көперәйгән атайҙар рухында тәрбиәләп булмай, әлбиттә. Ундай осраҡта инде нәҫел шәжәрәһе буйынса иң яҡшыһын табып, шул кеше рухында алып барылған тәрбиә. Затыбыҙҙың абруйы, тип йөрөтөлгән ундай ир уҙамандары. Был хаҡта данлыҡлы "Урал батыр" эпосында ла кинәйәләп әйтелгән фекер бар.

*- Минең әсәм - Айһылыу,*
*Атам Шүлгән булғандыр,*
*Һиңә туған булғандыр,*
*Дейеүҙәр мән киткәндер,*
*Аҙаҡ күп ҡан ҡойғандыр,*
*Яҡшыға дошман булғандыр,*

- тип килеп етә Айһылыуҙың улы Һаҡмар Урал батыр янына. Артабан әсәһенең һүҙҙәрен әйтә:

*Балам, атҡа мен, тине,*
*Иҙел мән бар, кит, тине,*
*Урал атаң юлынан,*
*Балам, яуға сап, тине,*
*Һаҡмар батыр бул, тине.*

Тимәк, Шүлгән дейеүҙәр менән киткәс, Айһылыу үҙ улын - Һаҡмарҙы, яҙыҡ юлға тайпылыуҙан ҡурсалап, Иҙел менән бергә Урал батыр эргәһенә оҙата. Атай намыҫын һаҡламаған бала ғаилә өсөн генә түгел, ил өсөн дә ҡурҡыныс. Ошо яҙыҡтан ҡурсалай Айһылыу үҙ улын. Айһылыу, улына дөрөҫ тәрбиә биреү өсөн, атай нәҫеленән булған туғанын һайлай. Шүлгәндең яҙыҡ юлдан китеүе өсөн бөтөн нәҫел-нәсәбен кәмһетмәй. Был, әлбиттә, ижад. Әммә бөтөн тәрбиә ҡанундарын туплаған бөйөк эпосыбыҙ ул.

Ә ысынбарлыҡта ирҙәр, атайҙар ниндәйерәк булған һуң? Башҡорт тормошон, көнкүрешен, ғаилә мөнәсәбәттәрен өйрәнгән рус ғалимдарының береһе Д. П. Никольский, мәҫәлән, былай ти. "Артабан башҡорттарҙың ыңғай холоҡтарынан уларҙың кешелекле булыуын, ихласлығын, иплелеген әйтергә мөмкин. Ипле булыуҙары ғаиләлә айырыуса сағыла. Башҡорт үҙ ҡатынына бик иғтибарлы, уны бер ҡасан да һуҡмай, яфаламай... Башҡорт ирҙәре аҙ ғына мөмкинлек сығыу менән ҡатынына нимә булһа ла, хатта бәләкәй генә әйбер булһа ла бүләк итергә тырыша".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙҙың ижад өлгөләренән боронғо тәрбиә ҡанундары тураһында мәғлүмәттәр сүпләп йыйыуымдың сәбәбе бер: матур күңелле, бай ижадлы, сикһеҙ кешелекле, ҡунаҡсыл, сая йөрәкле, иҫ китмәле илһөйәр халыҡбыҙ. Аяуһыҙ ҡаршылыҡтарға бирешмәй һаҡланғанбыҙ. Хәҙер иһә миләтебеҙҙе һаҡлап ҡалдырыу юлдарын әллә ҡайҙарҙан эҙләп, кемдәрҙәндер өлгө алырға маташып ҡараған булабыҙ. Ят өлгө менән ят милләткә әйләнергә йөҙ тотмаһаҡ, башҡаларҙың өлгөһө кәрәкмәй. Быуаттар буйы милләтебеҙҙе миләт итеп һаҡлап килгән үҙ өлгөбөҙҙө генә заманға яраҡлаштырып йәшәү зарур. Заманға яраҡлаша алмаһаҡ та юғалыуыбыҙ ихтимал. Шуның өсөн үҙ ҡалыбыбыҙҙы өйрәнәйек, унан ситләшмәйек, фәҡәт камиллаштырайыҡ ҡына. Һәр яҡшыны үҙебеҙҙән башлайыҡ.**

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

✓ ***Булмышыңа ҡапма-ҡаршы булған характерҙы ла, ҡабул иткең килмәгән геройҙы ла, темаларҙы ла ышандырырлыҡ итеп башҡарыу ул артислыҡ. Мин-минлегеңде һындырып, йомшаҡ материал хәленә етеү ул ролгә инеү.***



*ИЖАДХАНА*

**"Һөйкөмлө" тигән матур һүҙ бар беҙҙең телдә. Күҙ ҡарашҡа, һөйләшеүгә, аралашыуға еңел, теремек, һыңғай, позитив фекерле, күңелсәк кешеләргә ҡарата әйтелә. М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актрисаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Гөлфиә РАФИҠОВА менән танышып алып әңгәмәләшә башлағас та башҡа шундай уй килде. Һәм был һөйкөмлө кеше менән һөйләшеү ҙә еңел, күңелле, мауыҡтырғыс булды.**

# МИН ҮҘЕМДЕ ОШО ЙӘШЕМДӘ,

## ошо төҫөмдә яратам...



**➔ Бала саҡта ҡыҙҙарҙың күбеһе артист булам тип хыяллана. Һеҙҙә лә был хыял булғанына иманым камил һәм ошо ниәтте тормошҡа ашырыу нисегерәк булды?**

- Бала саҡта мин бик ҡыйыу, телсән бала булғанмын. Ишембай районының Бәләкәй Үтәш, боронғоса әйткәндә, Бәрлеүән ауылында, оло ғаиләнең кинйә балаһы булып үҫтем. Төпсөктәргә хас иркәлек тә, иғтибарға һуғарылып осона биреп китеү ҙә булғандыр инде. Әртисләнгәнмен инде. Бөтә сараларҙа ла йырлайым да бейейем. Хатта бер ауыҙ һүҙ рusса белмәгән көйө "русса" сығыш яһарға башым еткән. Үҙем уйлап сығарған телдә өс куплетлыҡ йыр йырлап, русса башҡарам, тигәнмен. Яңы йыл байрамында Ҡыш бабай алдында сығыш яһағанмын, бүләк алғы килгәндер инде. Шул хәлде ауылда ололар һаман да иҫләп көлә.

Ҡайҙа ла йырлаталар, бейетәләр ине. Ололарға мәҙәк булғандыр. Унан "Был бала әртис кенә булыр инде" тип маҡтайҙар, ә миңә етә ҡала, тағы ла дәртләнеберәк китәм. Һәм бына ошондай "әртис булыр был" тигәнде бик йыш ишетеү мине лә шуға ышандырған. Икенсе һөнәр тураһында уйлау башҡа ла инмәне. Хатта инде үҫә төшөп, ояла башлағас та, концерттарҙа сәхнәгә сығырға тартынғанда ла, күңел түрендәге был хыял юғалманы.

Инәйемә (әсәйгә) сәнғәт институтына барырға йыйыныуым хаҡында әйткәс, ул был хәбәрҙе атайға еткерҙе һәм унан "Артист та булдымы һөнәр, улар тормошо тормошмо инде!" тигән кеүегерәк ризаһыҙлыҡ белдерелде. Элек беҙҙең бала саҡта атайҙар менән ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшеү юҡ ине бит, ул әйтерен шулай әсәй аша ғына еткереп ҡуя ине. Ошондай "фатиха" алып булһа ла киттем уҡырға. Оҙатып, етәкләп йөрөтөүселәр юҡ. Индем институтҡа, уҡып сыҡтым... Иң үкенеслеһе нимә - атайым минең сәхнәлә уйнауымды берҙе лә күрә алманы, иртә мәрхүм булды. Ә минең тап уға яратҡан һөнәремде күрһәткем килгәйне.

Атайым шулай тиһә лә, миндә сәнғәткә һөйөү тап уларҙың үҙҙәренән күскән. Инәйем клубта эшләгән, тәҙрә ҡорғандарына тиклем тегеп элеп ҡуйған үҙе. Ауылдаштарҙы йыйып, ойоштороп, спектаклдәр уйнатып, ауылдар буйлап концерттар ҡуйып йөрөгәндәр. Атайым гармунда уйнай ине. Хәтерләйем, тальян гармуны булды, 45 һумға һатып алған. Хаҡын тел сартлатып әйтәләр ине. Шул йәшел гармунын һүҙып уйнап ебәрә, инәйем моңло тауыш менән йырлап ҡушыла. Унан атай бейергә төшөп китә. Уның һымаҡ бейегәндәр һирәк булғандыр. Яурындарын уйнатып, бөтөн тәне менән һәлмәк итеп боронғоса бейей, ҡыркыу хәрәкәттәр яһамай ғына, ойотоп, йомшаҡ итеп баҫа торғайны, тип һөйләйҙәр. Хәҙер ундай бейеү үҙенсәлеге онотолған тигәндәй.

Ата-әсәнән күреп, өйҙә лә балалар гармун, ҡурай тотто. Бер-бер артлы гармунсылар үҫеп сыҡты. Хатта ике ағайым бер гармунды бүлешә алмай тартышып, урталай өҙөп сығарғандар. Шунда ла атай әрләмәгән, ә гармун эсендәге ҡылдарынан ҡумыҙҙар яһап биргән. Яңы гармун һатып алғандар малайҙарға.

**➔ Ниндәй ролдәрегеҙҙә һеҙ үҙегеҙҙе астығыҙ? Һәм ҡайһы образдарҙа ысын героиня булып күрендегеҙ?**

- Башта эшләй башлағанда һәр бер роль эстә ҡаршылыҡ тыуҙыра ине. Был минең роль түгел, мин уйнай торған образ түгел был, тип уйлайһың. Үҙеңә ярамаған ят кейем кейгән һымаҡһың. Әммә артистың өлөшө шундай, ул теләгән ролен һорап ҡына алып башҡара алмай. Һинең мөмкинлегеңдән, һәләтеңдән һәм башҡа күрһәткестәреңдән сығып, ролдәрҙе режиссер билдәләй. Артист бер төрлө образдарға йәки типик геройҙарға ҡалыплашырға тейеш түгел. Ул ниндәй ролдә лә башҡара алыу кимәлендә етергә бурыслы. Һәр хәлдә, шул тәңгәлдә эшләргә лә эшләргә. Булмышыңа ҡапма-ҡаршы булған характерҙы ла, бөтөнләй ҡабул иткең килмәгән геройҙы ла, темаларҙы ла ышандырырлыҡ итеп башҡарыу ул артислыҡ. Мин-минлегеңде һындырып, уттан боҙло һыуға инеп, һығылмалы, йомшаҡ материал хәленә етеү ул ролгә инеү.

Йәштәр театрында эш башлағас, һәр ваҡыт хисле, хыялый, ғашиҡ ҡыҙҙарҙы уйнаным. Был ролдәр миңә шул тиклем килешә кеүек ине. Сөнки мин яһалмаланмайым, тап үҙемдең булмышымда, үҙемдең тормошомдо сағылдырып йөрөйөм кеүек. Унан тормошҡа сығып, бала әсәһе булып, декрет ялдынан сыҡтым да, әлеге хыялый ҡыҙҙар роленә инеп ултыра алмайым да ҡуям. Сөнки үҙемдә инде олоғайған кеше, ир ҡатыны, бала әсәһе итеп тоям. Йәнәһе, мин тамашасыны йәш ҡыҙыҡай булып алдап йөрөйөм кеүек. Бер шундай психологик ҡаршылыҡ булып алды үҙ-үҙемдә.

Ә былай "Һинд ҡыҙы"ндағы Зәйтүнә, "Мөхәббәт тураһында йыр"ҙағы Гөлнар, "Мөхәббәт һәм нәфрәт"тәге Зөлхизә, "Юлдарым - һағышлы моңдарым"дағы Асель, "Ҡатын ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы"ндағы Алһыу, "Айгөл иле"ндәге Айгөл, "Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты" комедияһындағы Сәкинә һәм башҡа ролдәрҙә мин ниндәйҙер үҙемдең бер өлөшөмдө күрҙем. Һәр бер образымдың йә бер ҡылығында, йә бер һүҙендә, монологында күңелемә ауаздаш сыңдар булды. Мин уларҙы сәхнә персонаждары итеп асһам, улар мине актриса булараҡ асты һәм тамашасыға танытты. Һәр ролемә рәхмәтлемен.

**➔ Нисек уйлайһығыҙ, билдәле булыу артистың маҡсатымы?**

- Сәнғәт күгендә ҡапыл балҡыған йондоҙҙар ҙа, бер арауыҡта ғына күренеп ҡалғандары ла, үҙ быуынының билдәле шәхесе булған артистар ҙа бар. Миңә ҡалһа, мин һәүетемсә генә алға барам, ашыҡмайым, ҡабаланып-ҡарһаланмайым, тип уйлайым. Билдәле булыу, дан түбәһенә менеп етеү маҡсатым түгел, артист булыуым - ул минең хеҙмәтем. Мин был эште яратам, бәләм, ошо һөнәр менән көн итеп йәшәйем һәм дөйөмләштереп әйткәндә, был минең тормошом.

**➔ Әҙәбиәттә лә, кино сәнғәтендә лә йыш ҡына артистар тормошон, актрисаларҙы яһалма, әллә нисә ҡатлы һәм йәшәйештә лә төрлө ролдәр үтәп йәшәгән итеп һүрәтләйҙәр. Ошоларҙы кире ҡағып йәки хуплап, берәй нәмә әйтер инегеҙме?**

- Шаярып башлағанда, улым бәләкәйерәк саҡта миңә эйәреп эшкә килә. Артистар үҙ-ара ҡосаҡлашып, үбешеп сәләмләшәбеҙ, комплименттар әйтешәбеҙ. Улым ҡарап тора-тора ла әйтеп һала: "Күренеп тора бит инде бер-берегеҙҙе артыҡ яратып тормағанығыҙ, нимәгә үбешеп-ҡосаҡлашып тораһығыҙ ул?" - ти. Быны ишеткәндәр әй көлә, бала бар ерҙә ғәйбәт юҡ, тиҙәр.

Ә инде халыҡта йәшәгән шундай фекерҙе кире ҡағып, нимә әйтер инем? Артистар ҙа шулай уҡ үҙ аҙмышын йәшәй, ул башҡаларҙан бер ниндәй характер һыҙаты йәки ҡатлы-ҡатлылығы менән айырылып тора, тимәҫ инем. Улар бары күҙ алдында, телдә, иғтибар үҙәгендә, шуға улар тормошо күренеп бара ла. Асылда, артистарҙың танауына сиртер "артистар" булып ҡуя. Ирониәһыҙ әйткәндә лә, ауылдарҙа, ябай мәжлестәрҙә лә артистарыңды уҙҙырыр һәләтле, телсән, юморға бай кешеләр осрап ҡуя. Бөтөн килбәте, төҫ-һыны, һәләте тәбиғәттән бирелгән була.

Әлбиттә, һөнәр кешене яһай ул, мәҫәләң, уҡытыусыларға уҡытыусы асылы һеңеп китә, табиптарға табип роле, тигән кеүек. Артистар ҙа ниндәйҙер кимәлдә ҡайһы бер осраҡтарҙа "уйнарға" мөмкиндәр. Әммә артист кеше тормошта ла роль уйнап йәшәй, тигән фекер дөрөҫ түгел. Уйнау, яһалмаланыу, ҡыланыу төрлө кешегә хас һыҙаттар.

**➔ Ҡатын-ҡыҙҙың йәшен һорамайҙар, тиһәләр ҙә, түңәрәк һандарҙы юйып ҡына ташлап булмай, ул һандар үҙен тойҙора, йөҙгә, сәскә үҙ төҫөн һала тигәндәй... Һеҙ быға ҡаршы нисек ҡарашаһығеҙ?**

- Ҡарашам, тип... Ысынында, йәшмен икән тип уйлап тик йөрөйөм мин. Әле бына юбилейым булды, әммә олоғаям икән тип ҡабул итмәйем. Мин ошо йәшемдә, ошо төҫөмдә үҙемде яратам. Бик унайлы тоям ошо булмышымда. Һәр хәлдә, ҡырҡтан ары ҡатын-ҡыҙға олпатлыҡ килә һәм эске яҡтан да, тышҡы яҡтан да үҙен ҡулда тоторға ынтылырға тейеш. Ситтән үпкәләтерлек һүҙ йәки ҡараш булмаһын өсөн. Иң тәүҙә үҙеңдә яҡшы тойоу өсөн.

Мин пластик операцияларға ҡаршымын, шулай уҡ әлегәсә заман технологиялары, косметик салондар ярҙамы менән дә ҡулланғаным юҡ. Кеше, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ үҙ йәшенән артыҡ айырылмаҫҡа тейештер тип уйлайым. Илле йәшкә ет тә, бер һырһыҙ ҙа булмай ҙа инде. Был йәштә шып-шыма битле, үҫтерелгән керпекле, оҙон тырнаҡлы булып ултырыу шөкәтһеҙлек булыр ине. Аллаһы Тәғәләнең биргән төҫ-һынына шөкөр итеп, һимермәҫкә, теремеклекте ташламаҫҡа, оптимистик ҡараштан яҙмаҫҡа тырышып йөрөргә кәң. Донъяның аҡ яҡтарын, кешеләрҙең яҡшылығын, тәбиғәттең аяҙлығын күрергә ынтылып йәшәү зарур. Үҙең дә башҡаларға матур кәйеф бүләк итерҙәй ыңғай энергетикалы, таҙа ауралы әҙәм булырға тырышырға кәрәк. Бындай кешеләр менән аралашҡанда уға нисә йәш икән, кейеме ниндәй икән, ҡайһы салонға йөрөй икән, тип уйламайһың бит, ә ҡайһылай һәйбәт кеше, тип уйлайһың. Минең фекерем шулай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас баҫалҡы, ябай, асыҡ Гөлфиә Рафиҡованың ижады ла яйлап-яйлап тауға үрләгән йөк тулы арбаны күҙ алдына килтерә. Был арбала уның ғүмер юлы ла, сәхнәгә сығарған ролдәре лә, ғаиләһе лә, рухи байлығы ла, күңел кисерештәре лә. Һәм ул үҙ юлы менән һәүетемсә генә хәрәкәт итә.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ Иген сәсмәйенсә генә өйҙә көтөп ултырһаң, бер ҡасан да икмәк үҫтереп булмағанын һис кем инҡар итмәҫ. Берәй ерең һынып, хирургтан әмәлләтмәйенсә, һөйәгең уңалмауы ла мөмкин. Ашамайынса тамаҡ та туймай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘНГЕНЕ АША

■ Иртәнге аш күптән бәхәс сығанағы булып тора. Иртәнге ашты мотлаҡ ашарға кәрәк, тип раҫлай ине белгестәр быға тиклем. Ә бөгөн улар ябығырға тырышыусыларға иртәнге ашты ашамаҫҡа кәңәш итә. Иртәнге ашты ашамаусылар көнөнә 353 калорияға аҙыраҡ ҡабул итә икән. Лафборо һәм Бедфордшир университеттары ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 11-15 йәшлек 40 ҡыҙ ҡатнашҡан. Улар 3 көн дауамында иртән йә 6,3 грамм ҡоро аҙыҡ ашаған, 188 мл майлы һөт, 375 мл әфлисун һуты эскән, йәки иртән бер нәмә лә ашамаған. Белгестәр уларҙың көн дауамындағы физик әүҙемлеген дә күҙәткән. Һынауҙар күрһәтеүенсә, иртән ашамаған осраҡта ҡыҙҙар төшкө һәм киске ашта калориялырҙы күберәк ҡулланған. Әммә был артыҡ калориялар иҫәбе 115-тән үтмәгән, ә иртәнге ризыҡ 468 калория торған. Тимәк, һөҙөмтәлә ҡыҙҙар иртәнге ашты ашамағанда рациондарын 353 калорияға кәметкән.

■ Аҙыҡ-түлек һауыттары өсөн ҡулланылған пластик составындағы А бисфенолы тәьҫире һөҙөмтәһендә ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлегендә проблемалар башланыуы ихтимал. Был матдәнең хатта әсә ҡарынындағы балаларға ла йоғонтоһо бар. Хәүефле берләшмә ашҡаҙан-эсәк трактындағы "яҡшы" һәм "насар" бактериялар балансын боҙа. Ғалимдар фекеренсә, А бисфенолы тәьҫире һөҙөмтәһендә эсәк дисбактериозы барлыҡҡа килә. Ул бауырҙың һәм йыуан эсәктең хроник шешеүе менән бәйле. Белгестәр пластик ҡаптарҙағы ризыҡ менән туҡланмаҫҡа кәңәш итә. Бигерәк тә ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарға һәм балаларға һаҡланырға кәрәк.

■ Бөгөн тик файҙалы ризыҡтар менән туҡланырға тырышыусылар күбәйә. Әммә бының кире яғы ла бар. Дөрөҫ туҡланыу хәүефле булыуы ихтимал, тип иҫкәртә ғалимдар. Туҡланыу буйынса эксперт Патрик Дену, вегетариан диетаһы B12 витамины дефицитына килтереүе бар, ти. Был витамин етешмәһә, сәләмәтлек менән бәйле күңелһеҙлектәр башлана. Мәҫәлән, күреү һәләте түбәнәйә, арыу барлыҡҡа килә, депрессия башлана, хәтер насарая. B12 витаминын организм үҙе етештерә алмай. Ул йомортҡа, ит, балыҡ, һөт аҙыҡтары менән инә. Тағы ла бер бәлә - нервы орторексияһы һағалауы ихтимал. Гел дөрөҫ туҡланырға ынтылыу һөҙөмтәһендә кешелә ризыҡҡа ҡарата ытырғаныу барлыҡҡа килә. Былдай кешеләр үҙҙәре өсөн туҡланыу ҡағиҙәләрен уйлап таба һәм бынан ситкә тайпылмай.

■ Ғалимдар раҫлауынса, билдәле бер диета ҡулланып, күҙҙәрҙең төҫөн үҙгәртергә була. Кеше күҙенең төҫөн меланин пигменты билдәләй, ә ул үҙгәреп тора. Йәғни, был пигменттың әҙерәк йәки күберәк булыуынан сығып, күҙҙәрҙең төҫө билдәләнә. Ә уның күләменә ризыҡ ярҙамында тәьҫир итергә була. Мәҫәлән, көн һайын сәтләүек, бал ашарға яратыусыларҙың күҙҙәренең төҫө асыҡыраҡ була. Зәйтүн майы ярҙамында ла йомшаҡ төҫ килеп сыға, сөнки был майҙың составында линолен һәм олеин кислоталары бар. Имбирле сәй күҙҙәрҙең ялтырап тороуына килтерә. Тимергә бай шпинат күҙҙәрҙе сығыуыраҡ итә, сөнки ул күҙҙәрҙе тынысландыра, балыҡ, диңгеҙ продукттары A, B, C, D, E, K витаминдарына, шулай уҡ кальций, тимер, магнийға бай булғанлыҡтан, ошо уҡ төҫиргә эйә. Күҙҙәрҙең төҫөнә кеймәден төҫө лә йоғонто яһап, уны бер аҙ үҙгәртеп ебәрә ала.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# МАҠСАТЛЫ БУЛЫУ КӘРӘК

**Мөхәммәт бәйғәмбәр өйрәткән иман шарттарының береһе - һәммәбеҙ өсөн әллә ҡасан уҡ, хатта кешелекте барлыҡҡа килтерерҙән күпкә алдараҡ, Раббыбыҙ яҙып ҡуйған тәҡдиргә ышаныу. Тәҡдиргә ышаныуҙы үҙен мосолман тип һанаған кеше һис кенә лә инҡар итергә тейеш түгел.**



Беҙҙең менән, ғөмүмән, донъя йөҙөндә булып торған һәр ваҡиғахәл фәҡәт ана шул тәҡдир буйынса бара. Әммә күптәр быны ошо төшөнсәне аңлап етмәй. "Беҙ үҙебеҙгә үҙебеҙ яҙмыш, йәғни тәҡдир яҙабыҙ", тигән хаталы инаныуҙа булғандар бихисап. Улар, яҡынса, ошолайыраҡ фекер итә: "Ике юл сатына килеп торған кеше уңға-һулға китәсәген үҙе хәл итә бит. Әгәр теләй икәнһең, уңға йә һулға, хатта бер ҡайҙа ла бороломай, туп-тура ла китеүең мөмкин, йәғни, һинең ҡайһы яҡҡа китереңһис бер нәмә тарафынан сикләнмәгән..." Эйе, тәү ҡарауҙа был фекер дөрөҫ һымаҡ. Әммә... Ошо ситуацияны тәҡдиргә ышаныусы кеше күҙләгенән сығып ҡарайыҡ. Әйтәйек, берәү әлеге юл сатына килеп торҙо, ти. Ул ғына ла түгел, хатта унда кешеләрҙе иҫкәртеүсе Аллаһ бәндәһе лә бар икән, ти. Аллаһ бәндәһе асыҡ ҡына итеп: "Алдығыҙҙа ике оҙон юл ята. Уңға китһәң - юл ауыр, әммә ана шул ауырлыҡтарға ҡаршы тороп, уларҙы еңеп сыҡһаң, һине рәхәтлектәр көтә. Ә һулға китһәң - юл ифрат еңел, юлыңды уйын-көлкө менән, еңел генә үтерһең, әммә ошо юл ахырында һиңә шул-шул ҡыйынлыҡтар булыр, хатта ғазаптарға юлығасаҡһың", - ти икән. Берәүҙәр: "Иртәгеһен ишек ҡайғыртҡан, ул ғазаптар әллә була, әллә юҡ. Булған хәлдә лә, әллә ҡасан була әле. Бөгөнгө көн менән йәшәргә кәрәк..." - тип, һулға китте. Бик һирәктәр генә уң яҡҡа китә торған юлды һайланы, ти... Миҫалдың бына ошо урынына килеп еткәс, "Яҙмышты үҙебеҙ яҙабыҙ" тигән әлеге кеше: "Ана бит, кем ҡайҙа теләне - шунда китте, Аллаһ яҙыуына ла ҡараманы!" - тиер. Әммә, хөрмәтле уҡыусым, һығымта менән ашыҡма: Аллаһ Тәғәлә кешеләргә һайлау хоҡуғы биргән, әммә кемдеңдер еңел юлды йә иһә ауыр тарафты һайлауы ла уның тәҡдиренә инә. Раббыбыҙ уға тап ана шул юлды һайлап алыуын яҙмыш итеп яҙған. Икенсе төрлө булыуы һис кенә лә мөмкин түгел.

Күптәребеҙ хәҙерге йәшәйешебеҙ хаҡында ғына һүҙ алып барыуҙы хуп күрә. Был фани донъялағы тормошобоҙға, йәғни көнкүрешебеҙгә килгәндә лә, Аллаһ Тәғәләнең тәҡдиренә ышаныуҙы ағым ыңғайына ғына ағыу тип аңлау - төптән дөрөҫ түгел. Тәҡдиргә ышанған кеше лә тормошта нимәләр өлгәшеү өсөн һәр саҡ сәбәп ҡылып торорға тейеш. Иген сәсмәйенсә генә өйҙә көтөп ултырһаң, бер ҡасан да икмәк үҫтереп булмағанын һис кем инҡар итмәҫ. Бесән сапмайынса, үҙенән-үҙе аҙбарға бесән дә килеп өйөлөп ятмай. Берәй ерең һынып, хирургтан әмәлләтмәйенсә, һөйәгең уңалмауы ла мөмкин. Ашамайынса тамаҡ та туймай. Әммә, дөрөҫ аңларға тырышайыҡ, бына шулар - иген сәсеүең, бесән сабыуың, табипта дауаланыуың, хатта һинең көнөнә бер нисә мәртәбә ашауың да Аллаһ Тәғәлә яҙған тәҡдиргә инә. Улар барыһы ла әллә ҡасан уҡ Раббыбыҙ тарафынан яҙылған. Әммә, әгәр ҙә мәгәр берәү бына ошо ғәмәлдәрҙе үтәмәй, бот күтәреп өйҙә тик кенә ятты икән, быны ла ошо ата ялҡауҙың тәҡдире тип ҡарарға кәрәк. Хатта берәүҙәрҙең алдан "план" төҙөп ҡуйып, шуның буйынса ғына ғәмәлдәр ҡылыуы ла, ана шул кешегә һәр эшен планлаштырырға яҙғанлыҡтан ул! Беҙҙең теләктәребеҙ һис кенә лә Аллаһ ихтыярына ҡаршы килә алмай һәм унан тыш булмай. Бәйғәмбәребеҙ берәй үткән хәл тураһында "шулайтһам, шулай булыр ине" йә "былайтмаһам, былай булмаҫ ине" тип әйтергә түгел, ә "Ҡәдәруллаһи үә мә шәә-ә фәғәлә" (Был - Аллаһ тәҡдире, Ул ни теләне, шул булды) тиергә ҡушҡан.

Тәҡдиребеҙ Аллаһ Тәғәләгә ҡылған доғаларыбыҙға бәйле булыуы хаҡында ла риүәйәт бар. Аллаһтан башҡа, Ул яҙған тәҡдирҙе һис кем, һис бер нәмә йә иһә берәй ситуация бороп ебәрә алмай. Шуның өсөн дә Бәйғәмбәребеҙ һәр төрлө хөрәфәттәргә, ырым-юрауҙарға, йондоҙнамәләргә ышаныуҙы ҡәтғи тыйған, уны оло гонаһҡа һанаған. Сөнки ана шундай хөрәфәттәргә ышаныусылар тәҡдирҙе инҡар итә. Тик шуны ла белеү кәрәк: кеше ниндәйҙер берәй яуызлыҡ ҡылып та, тәҡдир менән аҡлана алмай. Ниҙер урлаған бер кешене тотоп, язаларға йөрөгәндә, әлеге бур: "Мин бит Аллаһ тәҡдире буйынса урланым!.." - тип аҡланырға тотонғас, уға: "Һин тәҡдир буйынса урланың, һәм беҙ ҙә һине тәҡдир буйынса язаға тарттырабыҙ", - тип әйткәндәре хаҡында риүәйәт бар.

Гәзитебеҙҙең 3-сө һанындағы "Мосолман әҙәбе" рубрикаһында Фәрзәнә Фәтихова өс хикмәт эйәһенең аңғәмәһен бәйән иткән. Үткән, киләсәк һәм хәҙерге замандың мөһимлеге хаҡында бәхәс ҡорған ана шул өс кешенең фекерен берләштереп, үткәндәрҙән ғәһем йә ғибрәт алып, киләсәккә Аллаһ Тәғәләгә өмөт бағлап, ә инде бөгөн Уның ҡушҡандарын үтәп һәм тыйғандарынан тыйылып йәшәһәк кенә беҙ тогро юлда буласаҡбыҙ. Быны шулай, алдыбыҙға маҡсаттар ҡуйып йәшәү мотлаҡ кәрәк! Үҙебеҙгә ниндәйҙер маҡсат ҡуйыуыбыҙ йә иһә, киреһенсә, вайымһыҙ ғына йәшәүебеҙ ҙә барыһы ла тәҡдиребеҙгә яҙылған. Бына ошо нәмәләрҙе дөрөҫ аңлау өсөн, башҡа йән эйәләренән айырмалы, беҙгә Аллаһ Тәғәлә аҡыл, зиһен биргән, беҙҙе иҫкәртеүсе бәйғәмбәрҙәрен ебәргән. Эйе, тормош юлдары ифрат та ҡатмарлы һәм ауыр. Шуға ҡарамаҫтан, фәҡәт тура юл менән генә алып барыуын Раббыбыҙҙан (йә Аллаһ, һидәйәт бир, тип) үтенеп, Уға доғалар ҡылайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА

# НИМӘ ЙӘШӘРТӘ ҺӘМ ҠАРТАЙТА?



**Ниндәй генә йәштә булмаһын, һәр ҡатын-ҡыҙ матур һәм йәш булып күренгеһе килә. Ҡайһы берәүҙәрҙең был уйы килеп сыға, ә икенселәрҙеке - юҡ. Сәбәбе нимәлә тип уйлайһығыҙ? Эш шунда: үҙен нимә йәшәртеүен, нимә ҡартайтыуын белгән гүзәл зат һәр ваҡыт йәш булып күренә.**

## Нимә ҡартайта?

Сырайҙағы ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо, тормошҡа пессимистик ҡараш, асыулы йөҙ - быларҙың барыһы ла ҡатын-ҡыҙҙы үҙенең йәшенән оло итеп күрһәтеүсе төп сәбәптәр. Һүнгән күҙле, шатлана белмәгән, битараф булып күренгән кеше лә ҡарт булып күренә. Эргә-тирәләге ваҡиғаларға, кешеләргә кире мөнәсәбәттә булыу, ғәйепләләрҙе эҙләү ғәҙәте, көнсөллөк тойғоһо ла гүзәл затты ҡартайта. Төшөнкөлөккә бирелгән, гел кемделер әрләгән, тәнҡитләгән кешеләр ҙә ваҡытынан алда олоғая. Ауыр уйҙары, кисерештәре сиргә юлыҡтырыуы ла мөмкин.

Тағы ла ҡатын-ҡыҙҙы сал сәсе оло күрһәтә. Уны бүяп йөрөгән осраҡта төбөнән үҫеп сыҡҡас та буятырға кәрәк. Әгәр тигеҙ генә ағарған булһа һәм уны буятырға теләмәһегеҙ, һәр ваҡыт йыуып, таҙа һәм матур итеп йөрөткәндә йәш булып күренергә мөмкин.

## Нимә йәшәртә?

Йөҙөнән йылмайыу китмәгән ҡатын-ҡыҙ тиҫтерҙәренә ҡарағанда йәшерәк күренә. Ихлас йылмайған ваҡытта күҙҙә барлыҡҡа килгән осҡон йәш һәм матур итә. Йылмаймауының сәбәбен ҡайһы берәүҙәр йәшәйештең ауыр булыуына бәйләр. Эйе, тормош булғас, барыһы ла була. Әммә килеп сыҡҡан проблеманы, ҡаршылыҡты, башҡаларҙы ғәйепләмәй генә, унан сығыу юлын эҙләү, табыу кешене көслөрәк итә. Ә рухы, ихтыяры ныҡтар бер нәмә алдында ла ҡаушап ҡалмай, алға бара, ышаныслы була.

Үҙен һәр ваҡыт ҡарап, тәрбиәләп, йәғни сәсен матур итеп йөрөткән, еңелсә биҙәнгән, биҙәүестәр таҡҡан, кәүҙәһенә, төҫөнә тура килгән кейем кейгән ҡатын-ҡыҙ йәш сырайлы була. Килешкән төҫлө әйбер йөҙгә яҡын булырға тейеш. Мәҫәлән, шарф, блузка, кофта, ирен буяғыс һәм башҡалар.

*✓ Айырым ғибәҙәт кешегә халыҡтарҙан айырылыуҙы, ҡатынһыҙ һәм малһыҙ булыуҙы күҙ уңында тотмай. Уның мәғәнәһе - намаҙ уҡыған ваҡытта фәҡәт Аллаһы Тәғәләне генә бел, ҡатыныңды иҫеңә төшөрмә, тигәндән ғибәрәт.*



*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР*

**XIX быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостанда бөтә Рәсәйгә билдәле ғилем усаҡтарынан Стәрлебаш, Өфөләге "Ғосманиә", Ырымбурҙағы "Хөсәйениә", Троицкиҙағы "Рәсүлиә", Стәрлетамаҡтағы "Нуғайиә" мәҙрәсәләре айырылып тора. Уларҙың башҡа мәғариф үҙәктәренән ҡырҡа айырылып тороуы прогрессив ҡарашлы уҡымышлыларҙың йөлеп ителеүе, улар аша уҡыу-уҡытыу системаһына, тәрбиә эшенә алдынғы алымдар индерелеүе, донъяуи фәндәрҙе уҡытыуға иғтибарҙың ныҡлап артыуы менән бәйле.**



# КЕМ УЛ ХӘБИБНАЗАР ҮТӘКИ?

Бөтөн төрки халыҡтарының идеологияһына әүерелә барған мәғрифәтселек хәрәкәте киң йәйелә барған осорҙа Стәрле төбәгендә лә заманса фекерләгән, алдынғы прогрессив ҡараштары менән халыҡ араһында абруй ҡаҙанған хәлфәләр, мөҙәристәр һәм башҡа дин әһелдәре үҫеп сыға. Улар араһында Әхмәтвәли бин Исламҡолой әл-Стәрле, Мөхәммәтҡафи бин Ҡотлозаман, Мөхәммәтшафиҡ бин Мөхәммәтшәриф әл-Үтәки, Хәбибназар бин Мөхәммәтҡафи әл-Үтәки һымаҡ рухани эшмәкәрҙәрҙең исемдәрен атарға мөмкин. Билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки - XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе. Ул 1862 йылдың 12 сентябрендә Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе юрматы башҡорттары йәшәгән Үтәк ауылында Мөхәммәтҡафи хәҙрәттең баш балаһы булып донъяға килгән. Ул тыуғанда ауыл ярайһы уҡ ҙур, өс мәхәлләле була. Башланғыс белемде Хәбибназар тыуған ауылында, атаһы мәҙрәсәһендә үҙләштерә. 1873 йылда Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһенә инеп, Ислам нигеҙҙәрен, мантыйҡ (логика), фиҡһе (ислам юриспруденцияһы) ғилемдәрен өйрәнә. 1879 йылда Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтан рус теле һәм математиканан һабаҡ алыуы билдәле. Шул уҡ йылдың көҙөндә ул Ҡаҙанға барып, Ш.Мәржәни мәҙрәсәһенә урынлаша. Тиҙ арала ул остазы Шиһабетдин хәҙрәттең иң зирәк һәм һәләтле шәкерттәренең береһе булып китә, 6-7 йыл уҡып, юғары баҫысты тамамлай, үҙе лә шул уҡ мәҙрәсәлә уҡыта башлай. 1889 йылда Ш.Мәржәни вафат булғас, ул ауылына әйләнеп ҡайта, Үтәк мәҙрәсәһендә уҡыта башлай, мөҙәрис була. Уҡыу йортон камиллаштырыуға күп көс һала, мәҫәлән, бай китапхана һәм уҡыу залы булдыра. Үҙ алдына күп уҡый, ғилми эш менән шөғөлләнә, бигерәк тә суфыйсылыҡ тәғлимәте менән ныҡ ҡыҙыҡһына, шиғырҙар яҙыуға әүәсләнеп китә. Атаһы һымаҡ, Хәбибназар ҙа үҙ төбәгендә мәғрифәтселек юҫығында әүҙем эшмәкәр, аҡыл эйәһе һәм әҙип булып танылыу таба. Ғәрәп-мосолман философияһы, Ислам тарихы буйынса киң билдәле хеҙмәттәргә шәрехтәр төҙөй, аңлатмалар яҙа, күптәрен үҙ дәрестәрендә уҡыу әсбабы сифатында файҙалана. Шиғырҙарында, яҙған шәрехтәрендә, шулай уҡ шәкерттәргә һабаҡ өйрәткәндә лә яңы, алдынғы ҡараштарҙы үткәрергә тырыша, уҡытыуҙа иҫке алымдарға ҡаршы сыға. Хәбибназар Үтәки мәҙрәсәләрҙә дин һабаҡтарын уҡытып, йөҙәрләгән шәкерттәр тәрбиәләгән арҙаҡлы шәхес булыу менән бергә, ижадында шәреҡ әҙәби традицияларына таяныусы үҙенсәлекле ҡәләм эйәһе булыуын да айырым билдәләргә кәрәк. Уның дини йөкмәткеле шиғырҙар яҙыуы, "Шура" журналы биттәрендә мәҡәләләр баҫтырыуы мәғлүм. Ул 1900 йылда Ҡаҙан ҡалаһындағы Кәримовтар матбағаһында ғәрәп Шәйех Шиһаб әт-Дин бин Сәләмәт әл-Мысыри әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил итеп, яҙма мәҙәниәттең көнбайыш ҡаҙаныштарына ныҡлап йөҙ тота башлаған шарттарҙа шәреҡ-мосолман әҙәп әҙәбиәте традицияларын милли ерлектә һаҡлау һәм артабан үҫтереү маҡсаттарынан сығып майҙанға килгән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора, бөгөн дә ентекле тикшереүгә лайыҡ. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.

**Илшат ЯНБАЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты, БДУ доценты.**

# НӘҮӘДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

### Бисмилланың яҡшылығы

Үткән замандарҙа бер изге ҡатын йәшәгән. Уның ире бик тә ике йөҙлө икән. Ҡатын һәр бер эшендә һәм һәр һүҙендә "бисмиллаһир-рахманир-рахим" тип әйтер булған. Әскерле ире уның был ҡылығына һәр саҡ асыулана һәм нәфрәтләнә икән. Бер көндө был ир "Һаҡлап ҡына тот, юғалтма", - тип, аҡса янсығын ҡатынына бирә. Маҡсаты ҡатынынан үс алыу була. Ҡатын янсыҡты алып, бер урынға йыйып ҡуя. Ир ҡатыны йәшергән ерҙән янсыҡты табып, эсендәге аҡсаһын ала ла, янсыҡты ҡойоға ташлай һәм ҡатыны эргәһенә барып: "Ҡайҙа, минә янсыҡты кире бир әле, аҡса кәрәк", - ти. Ҡатын янсыҡты йәшергән урынға йүнәлгәндә Аллаһы Тәғәлә Ябраил ғәләйһиссәләмгә: "Фәлән ерҙәге янсыҡты алып, фәлән урындағы аҡсаһын эсенә һал да, ҡатын йәшереп ҡуйған ергә кире килтереп ҡуй",- тип бойора. Ябраил ғәләйһиссәләм шунда уҡ Уның был бойороғон үтәй һала. Ҡатын "бисмиллаһир-рахманир-рахим" тип, янсыҡты иренә алып биргән икән, монафиҡ ире аҡсаның урынында булыуынан ғәжәпкә ҡалған. Шунан ул "тәүбә, әстәғәфирулла"һын уҡып, яҡшылар рәтенә инеп, бисмилланың бәрәкәтендә ҡатынын биҙҙереүҙән һәм шелтәләүҙән ҡотолоп, ике йөҙлөлөктән яҡшылыҡҡа килгән, ти.

### Ғибәҙәт хаҡы

Бер ғибәҙәт ҡылыусы һәм суфый әҙәм намаҙға баҫып, "Фатиха" сүрәһендәге "ик нәғбәд" тигән һүҙҙе әйтеп: "Мин Аллаһы Тәғәләгә дөрөҫ ғибәҙәт ҡылам", - тип һығымта яһай. Шул ваҡыт юғарынан: "Әй бәндә, ялғанды әйттең: һин минә ғибәҙәт итмәйһең, ә әҙәмдәргә ғибәҙәт итәһең" -, тигән тауыш килә. Шунан һуң ғибәҙәтсе тәүбәгә килеп, халыҡтан айырым ғибәҙәт ҡыла башлай. Намаҙында "ик нәғбәд" тигән Ҡөрьән һүҙен әйтеүе була, юғарынан тағы ла тауыш ишетә: "Һин минә ғибәҙәт итмәйһең, ҡатыныңа ғибәҙәт итәһең". Бынан һуң ғибәҙәтсе ҡатынын айырып, талаҡ ҡыла. Намаҙға баҫҡас тағы: "Һин малдарыңа ғибәҙәт ҡылаһың", - тигән тауыш килә. Был ир барлыҡ малдарын сазаҡа итеп өләшә. Инде дүртенсе тапҡыр намаҙға баҫҡас: "Әгәр ҙә һин "ик нәғбәд" һүҙен ихласлыҡ менән әйтә торған булһаң, хаҡ ғибәҙәт ҡылыусы һин", - тигән тауыш ишетелә...

Был хикәйәттән шул аңлашылһын: айырым ғибәҙәт кешегә халыҡтарҙан айырылыуҙы, ҡатынһыҙ һәм малһыҙ булыуҙы күҙ уңында тотмай. Уның мәғәнәһе - намаҙ уҡыған ваҡытта фәҡәт Аллаһы Тәғәләне генә бел, халыҡтарҙы һәм ҡатыныңды иҫеңә төшөрмә, тигәндән ғибәрәт.

**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒӘЙЕПЛЕЛЕК ТОЙҒОҺО

Ғәйеплелек тойғоһо - йәмғиәтебеҙҙә стресс хәле тыуҙырыусы иң төп сәбәптәрҙең береһе. Ғәйеплелек тойғоһо менән яфаланған кешеләрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Ғәмәлдә иһә, беҙ барыбыҙ ҙа ошо тойғоға төбәп тәрбиәләнгәнбеҙ. Бала саҡтан беҙгә насар тәртибебеҙ, нимәнәлер эшләгән йәки эшләмәгән, ниҙер әйткән йәки әйтмәгән өсөн ғәйепле булыуыбыҙ хаҡында иҫкәртеп торҙолар.

Күп кеше үҙенең әйләнә-тирәһендәгеләрҙән хуплау эҙләй, әммә үҙен ғәйепле итеп тойоуҙан ҡотола алмай. Был манипуляторҙар ҡоралы. Уның бөтә теләгәне - үҙендә ғәйепле итеп тойорға мәжбүр итеү. Бынан һуң төрлө ысулдар менән юғалтҡан абруйыбыҙҙы кире ҡайтарырға маташабыҙ. Ысынында иһә, үҙен ғәйепле итеп тойған килеш теләгән бер нәмәне эшләргә мәжбүр итеп була.

Ни өсөн беҙ быға юл ҡуябыҙ һуң? Сөнки ғәйеплелек тойғоһо хәстәрлелек һәм мөхәббәт менән берләштерелә. Әгәр һин башҡалар хаҡында хәстәрлек күрмәһәң, тимәк, һин "насар кеше". Ләкин ғәйептең хәстәрлек менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ бит.

Бала саҡта үҙенде ғәйепле итеп тойоуға өлкәндәр, бигерәк тә ғаилә ағзалары этәрә. Әгәр улар өсөн һинең үҙеңде ғәйепле итеп тойоуың яҡшы булһа, был һинең өсөн дә яҡшы булырға тейеш, йәнәһе. Һинең ҡылығың йәки әйткәнең уларға оҡшамаһа, һине "насар малай" йәки "насар ҡыҙ" тип атанылар.

Ғәҙәттә, һинең ҡылығыңды түгел, ә үҙеңде ғәйепләнеләр. Бигерәк тә бала саҡ осороноң тәүге биш йылында "яҡшы" һәм "насар", "дөрөҫ" һәм "дөрөҫ түгел" тигән баһалар биреп, ғәйеплелек тойғоһо һинең зиһененә бүләкләү йә яза биреү алымы аша һеңдерелә. Ата-әсәй ихтыярыһыҙҙан ғәйепләү ысулын үҙ балаларына контроль сараһы булараҡ файҙалана. Улар балаға, әгәр шулай эшләһәң, беҙҙе борсоуға һаласаҡһың, ти. "Күршеләр ни әйтер?", "Һин бит беҙҙе оятҡа ҡалдыраһың", "Һин ҙурыраҡҡа ла өлгәшә алыр инең" тигән кеүегерәк һүҙҙәр уларҙың тәрбиә ҡоралы булып хеҙмәт итә.

